ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 сентябрь (нарысай) 2024

№36 (1129)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тыйыу һалдылар ҙа ул...**



2

**Күҙ башынан - яңы ҡанундар**



6

**Ожмахта йәшәгәненде беләһеңме?**




8-10

**Ябылған ишеккә ҡарап,**




12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 953 һум 58 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

КӨН ВАҠИҒАҺЫ

# ИҢ МӨҺИМЕ - КЕШЕЛӘР



**Кисә, 12 сентябрҙә, республикала мөһим сәйәси ваҡиға - Радий Хәбировтың Башҡортостан Башлығы вазифаһын үтәй башлауына арналған тантаналы инаугурация сараһы булып үтте. Унда РФ Президентының Волга буйы федераль округы буйынса тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров та ҡатнашты.**

Тантананы Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев алып барҙы: "Беҙ һеҙҙең менән мөһим ижтимағи-сәйәси ваҡиғаның шаһитыбыҙ. Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын үтәй башлау ваҡиғаһы республиканың киләһе йылдарға үҫеш йүнәлештәрен, тарихын билдәләйәсәк, - тине парламент спикеры.- Башҡортостан Конституцияһына ярашлы, республика Башлығы кеше һәм граждан хоҡуҡтары һәм азатлығын бойомға ашырыуҙы гарантиялай, Башҡортостан Республикаһының иҡтисади һәм сәйәси мәнфәғәттәрен яҡлай, унын территорияһында законлылыҡты һәм хоҡуҡ тәртиптәрен тәьмин итә, төбәктең төп социаль-иҡтисади үҫеш йүнәлештәрен билдәләй".

Артабан Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан гимндары башҡарылғандан, залға Башҡортостан Республикаһы Дәүләт флагының һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының дәүләт телдәрендәге махсус рәсми даналарын алып ингәндән һуң, рәйеслек итеүсе Константин Толкачев Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Азат Ғәлимхановҡа һүҙ бирҙе. Ул 8 сентябрҙә булған һайлау һөҙөмтәләре буйынса Радий Хәбировтың еңеүе тураһында иғлан итеп, уға Башҡортостан Республикаһы Башлығы таныҡлығын тапшырҙы. Республика Башлығы Башҡортостандың дәүләт телдәрендә ант бирҙе. "Башҡортостан Республикаһы Башлығы вәкәләттәрен башҡарғанда Башҡортостан Республикаһының күп милләтле халҡына тоғро хеҙмәт итергә, Башҡортостан Республикаһы дәүләтселеген нығытырға һәм яҡларға, Рәсәй Федерацияһы Конституцияһын һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияһын үтәргә, кешенең һәм граждандың хоҡуҡтарын һәм иректәрен гарантияларға ант итәм", - тине Радий Хәбиров.

РФ Президентының Волга буйы федераль округы буйынса тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров Радий Хәбировты БР Башлығы вазифаһын башҡара башлауы менән ҡотланы һәм Башҡортостанда төбәк власть органдары ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн мөмкин булғандың бөтәһен дә эшләйәсәк, тигән ышаныс белдерҙе: "Һеҙҙең етәкселектә байтаҡ ҡына мөһим проекттар бойомға ашырыла, улар республика халҡында хуплау тапты. Башҡортостан - Рәсәйҙең терәк төбәктәренең береһе, илебеҙ иҡтисадына һиҙелерлек өлөш индереүсе эре индустриаль һәм аграр үҙәк. Күпселек йәһәттән был республика Башлығы командаһының уңышлы һәм эшлекле мөхит тыуҙырыуға булған иғтибарының һөҙөмтәһе", - тине Игорь Комаров.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров үҙенең сығышында яҡындағы биш йылда республикала ниндәй эштәр башҡарыласағы тураһында һөйләне һәм "Иң мөһиме - кешеләр. Беҙ республикала йәшәгән 4 миллион халыҡтың һәр береһенең сәләмәтлеге һәм именлеге өсөн яуаплыбыҙ", - тип билдәләне.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Киләһе йылдан эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһы артасаҡ. Күптән көтөлгән яңылыҡ ине инде ул был...*

***Сергей МИРОНОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" партияһы рәйесе:*** Президент Владимир Путиндың эшләп йөрөүсе пенсионерҙар пенсияһын индексациялау хаҡындағы ҡарары - социаль ғәҙеллек идеяһының еңеүе, шул уҡ ваҡытта был эшләүселәргә индексация туҡтатылғандан алып беҙҙең партияның миллионлаған граждандар мәнфәғәте хаҡына эшмәкәрлегебеҙ һөҙөмтәһе лә ул. Әйтеүемсә, индексациялау туҡтатылған 2016 йылдан алып беҙ йыл һайын Дума ҡарауына индексацияны ҡайтарыу хаҡында закон проекты әҙерләп бирә килдек. Бынан тыш, мин Владимир Путин менән осрашыу ваҡытында ла гел ошо мәсьәләне күтәрҙем. Президент был мәсьәләне Хөкүмәткә йөкмәтеп тә ҡарағайны бер мәл, ләкин Хөкүмәт уны ҡарауҙы кәрәк тапманы, бюджет өсөн көсөргәнеш булыр, тип уйланылар, күрәһең. Былтыр көҙ иһә беҙҙең фракция ентекле иҫәп-хисап яһап, уны Финанс министрлығына ебәрҙек. Беҙ ҡоро хәбәр һөйләмәнек, ә миллионлаған пенсионерҙарҙың индексацияны туҡтатыу арҡаһында "күләгә"гә китеп эшен дауам итеүенең ҡаҙна өсөн ниндәй ҙур юғалтыу икәнлеген һандарҙа иҫбат иттек.

Президент менән быйыл мартта булған осрашыуҙа тағы индексация хаҡында һүҙ ҡуҙғатып, үҙебеҙҙең әлеге иҫәпләүҙәрҙе күрһәттем. Эшләүсе пенсионерҙарға индексацияны ҡайтарыуҙы талап итеп, Конституция судына мөрәжәғәт итеү өсөн беҙҙең партия ике тапҡыр Дәүләт Думаһы депутаттары ҡултамғаларын йыйырға тырышып ҡараны, ләкин был ғәҙел талапҡа башҡа партияларҙың күпселек депутаттары ҡул ҡуйырға теләмәне. Мин был турала беҙҙең граждандар белергә тейеш, тип уйлайым. Думаның күпселек өлөшө һәм Хөкүмәт йылдар буйы беҙҙең мөрәжәғәттәрҙе кире ҡағып килде. Бөгөн, ниһайәт, илдәге ҡатмарлы осорға һылтанмайынса, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, Президентыбыҙҙың ҡарар ҡабул итеүе ил башлығының үҙ башланғысы менән илебеҙҙә ыңғай социаль йүнәлешкә йөҙ тотоуы хаҡында һөйләй. Дәүләт социаль ғәҙеллек юлын һайлай, ҡайһы бер даирәләрҙең ошо юлда тотҡарлыҡтар яһарға маташыуына ҡарамаҫтан. Хәҙер беҙ 8 йыл буйы тупланған индексация бурысын эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға тулыһынса ҡайтарыуҙы юллаясаҡбыҙ.

12+

✓ *Һәр бер яңылыҡ ғәҙәткә әүерелеп киткәнгә тиклем ниндәйҙер ҡытыршылыҡтар һәм аңлашылмаусылыҡтар булып алыуы бик мөмкин, ләкин әле әйтелгәндәр хәл итеп булмаҫтай проблемаға әйләнер тип тә уйларға ярамайҙыр.*



БЫНАҒАЙЫШ

# ТЫЙЫУ ҺАЛДЫЛАР ҘА УЛ...

**Яңы уҡыу йылының тәүге аҙнаһы үтеп тә китте. Туғарылып китеп тотош өс ай буйына ял иткәндән һуң балалар әле тиҙ генә "тәртәгә" инеп китә алмаҫ, моғайын. Өҫтәүенә, быйылғы уҡыу йылы яңы тәртип-ҡанундарҙан башланып китмәксе.**

Яңылыҡтар балаларҙы ла, уҡытыусыларҙы ла һәм, әлбиттә, ата-әсәләрҙе лә берҙәй үк борсой һәм тулҡынландыра. Уҡыусылар бигерәк тә мәктәптә гаджеттарҙы тыйыу менән килешеп бөтә алмауҙарын белдерә. Беҙҙең йортҡа терәлеп тигәндәй ултырған 30-сы Өфө дөйөм белем биреү мәктәбенең 10-сы класс уҡыусылары Рөстәм менән Максимдың әйтеүенсә, тәүге аҙнала был йәһәттән белем биреү учреждениеһы хакимиәте тарафынан әллә ни ҡәтғилек күрһәтелмәһә лә, "сирҡаныс алыу" шулай ҙа булған. Асыҡланыуынса, гаджеттар иҫәбенә смартфондар ғына түгел, ә ҡайһы бер балалар йөрөткән "аҡыллы сәғәттәр", планшет һәм башҡа төр электрон ҡорамалдар ҙа (калькуляторҙан башҡа) инә икән.

Хәйер, был законды мәктәптәр коллективтары өсөн яңылыҡ тип тә әйтеп булмай, сөнки гаджеттарға тыйыу һалыусы законға 2023 йылдың декабрендә үк ҡул ҡуйылғайны, быйыл ул сентябрҙең 2-һе, ниһайәт, ғәмәлгә инде. Тик бына закон сығарыусылар тыйыуын тыйһа ла, ҡанунды нисегерәк бойомға ашырыу юлдарын, йәғни уны башҡарыу "процедураларын " сәйнәп бирмәгән, әлбиттә, был "ҡара эш" мәктәп педагогтары елкәһенә йөкмәтелгән. Ә бит теге йә был уҡыусы дәрескә смартфонын тапшырып ингән хәлдә лә уның "йәшертен" кеҫәһендә йә портфелендә тағы бер телефоны ятмайҙыр, тип әйтеп буламы һуң? Эш шунда, йәшерелгән гаджеттарҙы эҙләп, педагог балаларға тентеү үткәрергә тейешме хәҙер? Ҡыҙыҡ килеп сыға түгелме был? Икенсе бер мәктәптә эшләүсе таныш уҡытыусы әйтеүенсә, август аҙаҡтарында булып үткән ата-әсәләр йыйылышында тап ошо хаҡта ла һүҙ булған һәм ата-әсәләр балаларға тентеү яһамауҙы һораған, сөнки был уларҙы кәмһетеүгә бар, ти икән улар.

Тағы бер борсоған мәсьәлә - телефондарҙы йыйып алыуҙың, дөрөҫөн әйткәндә, мәктәп хакимиәтенә йә айырым уҡытыусыға ҡарата матди яуаплылыҡ йөкмәтеүе. Дөрөҫ, смартфондар бикләнә торған ышаныслы урында һаҡланасаҡ, әлбиттә, тик шулай ҙа был барыбер гаджеттарҙың юғалыуына, боҙолоуына йәки нигеҙһеҙ ғәйепләүҙәргә килтереүгә бар, тип шик белдерә уҡытыусылар.

Әлбиттә, һәр бер яңылыҡ ғәҙәткә әүерелеп киткәнгә тиклем ниндәйҙер ҡытыршылыҡтар һәм аңлашылмаусылыҡтар булып алыуы бик мөмкин, ләкин әле әйтелгәндәр хәл итеп булмаҫтай проблемаға әйләнер тип тә уйларға ярамайҙыр.



Мәскәүҙәге ҡайһы бер мәктәп коллективтары, мәҫәлән, уҡыусыларҙың телефондарын йыйып алаһы урынға, уларҙы дәрескә һүндереп инеүҙәрен талап итеү менән генә сикләнмәксе, тип яҙа интернет сығанаҡтары. Дөрөҫ, был сара балаларҙан билдәле дәрәжәлә тәртип һәм мәҙәнилек кимәле талап итәсәк. Ә беҙҙең балаларҙың бөтәһендә лә бармы былдай тәрбиәлелек, тыңлаусанлыҡ һәм яуаплылыҡ сифаттары?

Баяғы мин һөйләшкән ике үҫмерҙең әйтеүҙәренсә, дөйөм чаттарҙа аралашыусы балалар телефондарынан бер минутҡа ла айырылырға теләмәй, имеш, һәм улар дәрескә смартфондарын нисек тә булһа ышаныслыраҡ йәшереп инеү хаҡында баш вата.

Уйлап ҡараһаң, иҫ китмәле шул: смартфон бөгөн балаларҙың ғына түгел, хатта өлкән йәштәге кешеләрҙең дә айырылмаҫ дуҫына, хатта ки бөтөн тип әйтерлек һорауҙарына яуап биреүсеһенә, юл күрһәтеүсеһенә, кәңәш биреүсеһенә әйләнде лә ҡуйҙы бит, ғәжәп! Нисек тиҙ яулап алды кеше күңелен был йәнһеҙ электроника приборҙары: улар һәр минут бергә - ашағанда ла, ванна ингәндә лә, йоҡлағанда ла, юлда ла, транспортта ла, урамда йәйәү китеп барғанда ла хатта. Бөгөн килеп шуларҙы айырырға уйлайҙар, тиме, үәт, әй!

Ә инде кешелектең, айырыуса балаларҙың гаджеттарға бәйлелеге - ул үҙе бер фажиғә, сир, тип әйтергә лә булалыр. Табиптар һәм психологтар күптән инде был хаҡта саң ҡаға: балаларҙың самаһыҙ смартфондар менән мауығыуы киләсәктә уларҙың тормошонда, һаулығында проблемалар килтереп тыуҙырыуы ихтимал, тип киҫәтә улар. Гаджеттар мәктәпкәсә һәм мәктәп йәшендәге балаларҙың уҡыуында ҡыйынлыҡтар тыуҙырып ҡына ҡалмай, ә үҙҙәре йәшәгән мөхитте, донъяны, ысынбарлыҡты, объектив мәғлүмәтте ҡабул итеү һәләтен боҙа, уларҙың аңын виртуаль донъя ауына сырмай, хәҡиҡәтте - ялғандан, ысынбарлыҡты - уйҙырманан айырыу мөмкинлегенән мәхрүм итә. Өҫтәүенә, бала ата-әсәһе, яҡындары, тиҫтерҙәре менән аралашыуҙан айырыла, үҙ-үҙенә йомола. Туҡтауһыҙ экранға текләп, күреү һәләте зыян күрә, ул ғына ла түгел, мобиль элемтә электр магнитлы тулҡындар бүлеп сығара, был иһә ҡайһы бер ғалимдар раҫлауынса, рентген нурҙарынан күпкә көсһөҙ булыуға ҡарамаҫтан, барыбер кеше организмына тәьҫир итә, сөнки әйләнә-тирәбеҙҙе ультра ҡыҫҡа тулҡындар менән сырмаусы нурландырғыс сығанаҡтар бөгөн ифрат күп. Шуға күрә гаджеттар менән самалап файҙаланыу, ә балаларға иһә сәғәтләп төҙөлгән график буйынса ғына рөхсәт итеү һис тә зыян булмаҫ ине.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Киләһе йылдан эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһы артасаҡ. Күптән көтөлгән яңылыҡ ине инде ул был...*

***Рөстәм ӘЛМӨХӘМӘТОВ, юрист:*** Эйе, ҡасан да булһа социаль ғәҙеллектең тантана итәсәгенә өмөтләнә инем, сөнки 2016 йылда тотҡан ерҙән киҫеп, тигәндәй, эшләп йөрөүсе өлкән йәштәгеләрҙең фекерен белешеп тә тормаҫтан, уларҙың законлы хеҙмәт өлөшөнә ҡул һуҙыу булғайны ул. Ниһайәт, Рәсәй Президенты Владимир Путин Халыҡ-ара иҡтисад форумында 2025 йылдан башлап эшләүсе өлкән йәштәгеләрҙең пенсияһына индексация хаҡында иғлан итте. Күптән көтөлгән ҡарар булды был, әйтергә лә түгел, сөнки, үҙегеҙ белмәгән ни эш, тигәндәй, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың күбеһе бер айға эшенән сығып, үҙенә тейешле был хаҡлы индексацияны түләтеп алды ла яңынан эшләй башланы. Ә ҡайһы берәүҙәре пенсияһына өҫтәмә алғас, бөтөнләйгә эштән китте. Шул арҡала хеҙмәт баҙарында эшләп йөрөүсе пенсионерҙар һаны ике тапҡырға кәмене. Улар бөтәһе 14 млн булһа, бөгөнгө көндә 7 млн тороп ҡалды. Ә бит бөгөнгө шарттарҙа тәжрибәле, квалификациялы кадрҙарға ҡытлыҡ заманы икәнен дә яҡшы беләбеҙ.

Индексацияны тергеҙеү һәйбәт, әлбиттә, Дәүләт Думаһы депутаттары был закон проектын бер тауыштан хупланы, ләкин ҡайһы бер тынғыһыҙ, халыҡ мәнфәғәте өсөн янып-көйгән бер нисә депутат, атап әйткәндә, танылған иҡтисад эшмәкәре Оксана Дмитриева, мәҫәлән, эшләүселәргә индексация 2016 йылдан алып ҡалдырылған бөтөн сумманы иҫәпкә алып үткәрелерме һуң, тип борсолоу белдергәйне. Ошо хаҡта ул тәҡдим иткән закон проекты, мәғлүм булыуынса, Дәүләт Думаһы тарафынан кире ҡағылды һәм уның борсолоуҙары, ысынлап та, дөрөҫкә сыҡты. Рәсәй Социаль фонды эшләүсе пенсионерҙарҙың пенсияһын индексациялау механизмын аңлатып, 2016 йылдан алып ҡалдырылған сумманы күҙҙә тотмай, ә 2025 йылдың 1 ғинуарынан, әгәр ул эшләмәгән хәлдә алынасаҡ суммаға ҡарап иҫәпләнәсәк, тип белдерҙе. Мәҫәлән, эшләүсе пенсионерҙың пенсияһы 17,4 мең тәшкил итһә, бынан алдағы өс йыл эсендә төшөрөп ҡалдырылған осорҙағы индексацияны тергеҙеп, ул хәҙер 23,4 мең булыр ине. Был эшләүсе пенсионерҙың иҫәп карточкаһында теркәлгән иң юғары күләм. Киләһе йылдан уларға индексация тап бына ошо сумма буйынса иҫәпләнәсәк тә инде. Ә инде 2016 йылдан алып иҫәпләнмәгән индексация күләме эшләүсе пенсионерға ул эшенән сыҡҡас ҡына тулыһынса түләнәсәк. Һәр хәлдә, үҙенә тейешле тулы сумманы алыуға мөмкинлек ҡалдырылыуы һәйбәт, әлбиттә. Ни тиһәң дә, ул эшләүсе пенсионерҙың хәләл тире һәм көсө түгелгән аҡса бит.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рәсәйҙә Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнөнә арнап, аҡсалата түләү индерелеүе ихтимал. Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәйҙең Министрҙар кабинетына йыл һайын күп балалы ғаиләләргә Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө уңайынан аҡсалата түләү тураһында мәсьәләне ҡарарға ҡушты. Мәсьәләне ҡарау тураһында доклад 2024 йылдың 1 декабренә тиклем әҙер булырға тейеш. Бының өсөн Рәсәй Премьер-министры Михаил Мишустин яуаплы.

✓ Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Махсус хәрби операция геройҙары хаҡында кино төшөрөргә ҡушты. Ошо маҡсатҡа дәүләт заказы бар, тип белдерҙе Радий Хәбиров. "Кинорежиссерҙар, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре менән осрашҡанда гранттар бирергә һөйләштек. Хәҙер дәүләт заказы Махсус хәрби операция менән бәйле. Һоҡланғыс яҙмышлы геройҙарыбыҙ күп", - тине республика Башлығы

✓ Башҡортостанда 1 октябрҙән 31-енә тиклем граждандар оборонаһы айлығы үткәрелә. Республика Хөкүмәте Бойороғонда билдәләнеүенсә, айлыҡ Башҡортостан биләмәһендә граждандар оборонаһын ойоштороуға һәм алып барыуға берҙәм ҡараш булдырыу, йәмғиәттә уның ролен күтәреү өсөн үткәрелә. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетына 16 сентябргә тиклем ошо сараны уҙғарыу планын әҙерләп, ведомстволарға һәм муниципалитеттарға ебәреү бурысы йөкмәтелде.

✓ Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһе барышында Радий Хәбиров республика эшҡыуарҙарының Махсус хәрби операцияға әүҙем ярҙам итеүе тураһында һөйләне. Радий Хәбиров илһөйәр эшҡыуарҙарҙы дәртләндереү формаларын әҙерләргә тәҡдим итте, уларҙың дәүләт наградаларына лайыҡ булыуын әйтте. Бына шундай кешеләргә таянырға кәрәк, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

✓ Башҡортостанда янғындарҙа, һыу объекттарында, юл-транспорт ваҡиғаларында кешеләрҙең һәләк булыуын кәметеү, шулай уҡ хайуандарҙың һәм ҡошҡорттарҙың ауырыуы менән бәйле ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү маҡсатында ауылдар араһында "Хәүефһеҙ ауыл" республика конкурсы үткәрелә. Конкурста ҡатнашыусыларҙан заявкалар 15 сентябргә тиклем ҡабул ителә, йомғаҡ 15 октябргәсә яһала. Еңеүселәргә бүләкләү суммаһы түбәндәгесә: ҙур ауыл биләмәләренә - 2,5 миллион - 750 мең һум, уртаса ауылдарға - 2 миллион - 500 мең һум, бәләкәй ауылдарға - 1 миллион - 250 мең һум.

***✓ Эшләүселәрҙең пенсияһына индексацияны тергеҙергә ҡушып, Президентыбыҙ Владимир Путин бик дөрөҫ эшләне. Эшләмәй өйҙә ятҡандарҙыҡы арта, ә беҙ, әйтерһең дә, икенсе сорт кешеләр кеүек, шул 13-15 мең пенсия алып йөрөй инек.***



*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# УЙҘАРЫБЫҘҘЫ ҮҘГӘРТҺӘК...



**Интернет гиҙеп бер яҙма йөрөнө. Япондар тураһында ине ул. Уларҙа бөгөн биш йөҙләп йөҙ йәште уҙғандар йәшәүе, ун биш йылдан уларҙың һаны миллионға етәсәге тураһында хәбәр итте сығыш яһаусы. Быңдай хәл башҡа бер илдә лә булмауын да һыҙыҡ өҫтөнә алды.**

Артабан был хәлдең серен былай тип аңлатты: "Йөҙйәшәрлеккә уларҙың туҡланыуы, сей балыҡ, емеш-еләк ашауы сәбәпсе тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ, - тине ул. - Былай туҡланыусы илдәр бихисап, илләә мәгәр уларҙа оҙаҡ йәшәүселәр барыбер күпкә кәмерәк. Был хәлдең сере - япон кешеһенең үҙ уйҙарын, үҙ һүҙен контролдә тота белеүендә. Улар кем менән генә һөйләшкәндә лә уның кәйефен төшөрөрлөк һүҙ әйтеүҙән, юҡ тип әйтеүҙән тыйыла. Улар негативтың кешенең кәйефенә генә түгел, һаулығына насар йоғонто яһай икәнен белә һәм шунан һаҡлана. Улар үҙҙәренең лөғәтенән "Юҡ!" тигәнде бөтөнләй алып ташлаған. Бына шундай фиғелле япондар иҡтисади яҡтан иң алға киткән илдә йәшәй. Ә бит Японияла дөгө сәсерлек тә ер, ҡаҙылма байлыҡтар юҡ..."

**Шулай тип йомғаҡ яһап ҡуйҙы был яҙманы һалған егет. Һәм... "Беҙҙең ата-бабалар аҡылында ла бар бит был "Яҡты уйлылар - Аллаһ хозурында, фатихаһында, һөйөүендә", тигән хәҡиҡәт, ул беҙҙең аң төбөндә, фиғелебеҙҙә әле лә һаҡлана..." тигән һығымта яһатты. Уйланайыҡ әле ошо хаҡта, тип әйтергә батырсылыҡ итәм...**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ТРАМП НИҢӘ ҮПКӘЛӘНЕ?



**Германия канцлеры Олаф Шольц, Украиналағы конфликтты тамамлауҙы тиҙләтеү буйынса фекер алышыуҙарҙы башларға ваҡыт етте, тип белдерҙе. "...әлеге һуғыш хәленән тиҙерәк тыныслыҡҡа күсеү тураһында һөйләшә башларға ваҡыт", - тине ул ZDF телеканалына интервьюһында.**

Әйтергә лә түгел, тыныслыҡты бөтәһе лә көтөп ала алмай. Хәҙер ул хатта күптән түгел Украинаны яҡлашып, уға хәрби ярҙам күрһәтеүсе беҙгә "дуҫ булмаған" илдәр өсөн дә кәрәк. Әммә... Бынан алдараҡ ҡына Кремлдең рәсми вәкиле Дмитрий Песковтың әйтеүенсә, был йәһәттән Мәскәүҙә әлегә асыҡлыҡ юҡ һәм беҙ Киевтың һөйләшеүҙәргә барырға әҙер булыуы хаҡында сигналдарының ни тиклем ысынбарлыҡҡа тап килеүе хаҡында бер ни ҙә белмәйбеҙ. Рәсәй етәксеһе бер нисә тапҡыр билдәләүенсә, Мәскәү Киев тарафынан билдәле шарттар үтәлгән хәлдә генә тыныс һөйләшеүҙәр алып барырға әҙер буласаҡ. Беренсенән, Украинаның Ҡораллы көстәре Рәсәй Федерацияһының бөтөн яңы төбәктәренән сығарылырға тейеш. Икенсенән, Киев режимы үҙенең НАТО-ға инергә ниәте юҡлығы тураһында рәсми белдерергә тейеш. Владимир Путин әйтеүенсә, бында һүҙ ошо шарттарға Украинаның һис һүҙһеҙ риҙалашырға тейешлеге хаҡында бара. Рәсәй талабының асылы - утты ваҡытлыса туҡтатыу түгел, был осраҡта Көнбайыш Киев режимын яңынан ҡоралландырыуы ихтимал; һүҙ конфликтты бөтөнләйгә тамамлау хаҡында бара.

Әйткәндәй, АҠШ-тың отставкалағы полковнигы Лоуренс Уилкерсон, Украина президентының Рәсәй төбәктәренә һөжүме ҙур хаталаныу булды, тип белдерҙе. Ошо һөжүм өсөн яуаплы булған Украина чиновниктарының отставкаға ебәрелеүенә тап Курскиҙағы операцияның тар-мар ителеүе сәбәпсе булды ла инде, ти Америка полковнигы. Бынан алдараҡ Америка журналисы Джексон Хинкл АҠШ-та Зеленскийҙың аҡылһыҙ сәйәсәте менән риҙаһыҙлыҡ белдереүҙәре һәм уны отставкаға ебәреү ихтималлығы хаҡында яҙып сыҡҡайны.

РФ Президенты Владимир Путин 5 сентябрҙә Владивостокта булып үткән Көнсығыш иҡтисад форумындағы сығышында Рәсәйҙең ил сиге территорияларына һөжүм мәсьәләһенә туҡталып китте. Бының менән Украина Рәсәй ғәскәре иғтибарын Донбасстан ситкә йүнәлтергә теләне, тип аңлатма бирҙе ул. Украина ғәскәренең Курскиға һөжүмен ул "бик хәүефле террористик акт" тип атаны. "Дошмандың ниәте килеп сыҡманы. Беренсенән, беҙҙең Ҡоралл Көстәр хәлде тотороҡландырыуға өлгәште һәм уларҙы ил сиге территорияларынан ҡыҫырыҡлап сығара башланы. Икенсеһе һәм иң мөһиме: беҙҙең һөжүмде тотҡарлаусы бер ниндәй ҡаршылыҡлы хәрәкәт юҡ. Киреһенсә, төп йүнәлештәрҙә дошман үҙенең баҙап ҡалыуын күрһәтте",- тине Путин. Теманы дауам итеп, Президенттың матбуғат секретары Дмитрий Песков Махсус хәрби операцияны дауам итеү өсөн мобилизация талап ителмәй, ә бына контракт менән килеүселәр бар, тине.

...Был осорҙа Америка тарафтарында ниҙәр бар? Әлбиттә, һайлауҙарға әҙерлек бара. Ә бына Республикандар партияһынан кандидат экс-президент Дональд Трамп Владимир Путинға үпкәләп ҡуйҙы бит әле. Әлеге иҡтисад форумында РФ Президенты уйынлы-ысынлы Камала Харрис кандидатураһын яҡлауы хаҡында әйтеп, Көнбайышта дискуссия тыуҙырҙы. "Күңелле итеп көлөүенә ҡарағанда, уның эштәре яҡшы булырға оҡшай, - тине Путин Камала хаҡында, - тимәк, президент булып һайланған хәлдә, Мәскәүгә ҡаршы санкцияларҙан тыйылып тороуы ла бар..." Ирония менән әйтелгән был һүҙҙәр Аҡ йорттоң, шулай уҡ Америка сәйәсмәндәре һәм журналистарының иғтибарын йәлеп итте, хатта Дональд Трамп та аптырабыраҡ ҡалды: "Ул Камаланы яҡлай. Мин бик үпкәләнем. Миңә ҡыҙыҡ булып китте әле: ни өсөн ул Камаланы яҡлай? Ул, әйтерһең дә, шахмат уйыны уйнай. Ул быны йылмайып әйттеме? Йылмайҙы шикелле...Белмәйем, быны бер кем дә белмәй һәм берәү ҙә аңламай",- ошондай монолог һөйләне Трамп Владимир Путиндың Камала Харрис кандидатураһы хаҡындағы һүҙҙәренән һуң. Уйынлы-ысынды һәм ишара мәғәнәһен бик аңлай һалып бармай шул бер ҡатлыраҡ американдар. Әйҙә, баш ватһындар әле!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ***Киләһе йылдан эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһы артасаҡ. Күптән көтөлгән яңылыҡ ине инде ул был...***

***Рәмилә АЛЛАҒОЛОВА, хеҙмәт ветераны, медицина туташы:*** Өфө дауаханаларының береһендә процедура туташы булып эшләйем. Бынан алда 21-се дауахана поликлиникаһында эшләгәйнем. Дөйөм эш стажым ҡырҡ йылдан ашыу тәшкил итә. Стационарға күсеүемә ни бары өс йыл ғына әле, етмәһә, мин эшләгән бүлексә мөдире алмашынды. Яңы кеше яңыса "һеперә", тигәндәй, был мөдир урыны өсөн ҡурҡтымы - мине бер айға эшемдән сығып, бик күп башҡа пенсионерҙар кеүек пенсияма индексация алырға рөхсәт итмәне. Башҡа урындарҙа эшләгән әхирәттәрем, таныштарым пенсияларын арттырып алдылар ҙа, һин дә мин, эштәрен дауам иттеләр.

Уйлап ҡараһаң, был тыйылған закон йә күрһәтмә түгел ине, хөкүмәт өндәшмәне, ирек ҡуйҙы. Был оҙаҡ йылдар эшен намыҫлы башҡарып, үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртып түгел, илебеҙгә хеҙмәт өлөшөн индереүсе күп кенә тәжрибәле кадрҙарҙың матди хәлен ярайһы нығытырға ярҙам итте. Артабан улар тағы ла дәртләнеберәк эшләй башланы. Ошоно күреп, иптәштәрем өсөн шатланһам да, үҙемдең хәләл көсөмдө түккән аҡсаны ала алмайынса мәхрүм тороп ҡалыуыма күңелем тула. Был дауахананан бөтөнләйгә китә лә ала инем, әлбиттә, ләкин өйөмә яҡын: йәйәүләп 10-15 минутта килеп тә етәм - шул уңайлығы тота мине бында. Унан коллективҡа ла тиҙ өйрәндем, яҡшы күңелле кешеләр күберәк булып сыҡты бында. Әлбиттә, мөдиргә үпкәм үтмәне, шулай ҙа башҡа йәһәттән ул беребеҙҙе лә ситкә типмәй, яҡшы ойоштороусы булыуын да иҫәпкә алырға кәрәктер, сөнки уның яйы сыҡҡан һайын матди ярҙам бүлеп, премияларҙан ҡалдырмауы ла күңелде йыуата. Бер яҡтан, был аңлашыла ла, сөнки бөгөн илдә медицина хеҙмәткәрҙәре етешмәй, йәштәр бик килә һалмай, сөнки стационарҙа эшләү ауыр "участка" иҫәпләнә. Килгәндәрен дә өйрәтергә тәжрибәле медиктар кәрәк. Шуға күрә дауахана етәкселеге нисек тә тәжрибәле хеҙмәткәрҙәрҙең эштән китеүен теләмәй. Башҡортостанда ғына ла, мәҫәлән, гәзиттән уҡып белеүемсә, 4 мендән ашыу урта звено медицина кадрҙарына ҡытлыҡ.

Унан һуң, уйлап ҡарайым да, эшләүселәрҙең пенсияһына индексацияны тергеҙергә ҡушып, Президентыбыҙ Владимир Путин бик дөрөҫ эшләне, юғиһә, күпме кешенең күңеле китек ине бит. Эшләмәй өйҙә ятҡандарҙыҡы арта, ә беҙ, әйтерһең дә, икенсе сорт кешеләр кеүек, һаман да шул 13-15 мең пенсия алып йөрөй инек. Ә бит эш хаҡыбыҙ ҙа көнләшерлек түгел, улайға китһә. Күрәләтә ғәҙелһеҙлек ине был. Аңлайым, илебеҙҙә бер ваҡытта ла финанс хөрлөгө булғаны юҡ, әле бигерәк тә, сөнки оборона сығымдары байтаҡ. Ләкин теләгәс, яйын таптылар бит ана - рәхмәт Президентҡа, башҡа ни әйтәһең. Әгәр эштән сығырға ғариза яҙһаң, 2016 йылдан алып иҫәпләнмәгән индексацияның бөтөн суммаһын ҡайтарасаҡтар, ул юғалмаясаҡ, тип ышандыралар. Шулай булырға тейеш тә!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йыл һайын сентябрҙең икенсе йомаһында Башҡортостанда республика халыҡтарының Милли кейеме көнө билдәләнә. Быйыл байрам 13 сентябргә тура килә. Республика халыҡ ижады үҙәге Милли кейем көнөнә арналған флешмобҡа ҡушылырға саҡыра. Бының өсөн социаль селтәргә милли кейемдә тәбиғәт һәм архитектура ҡомартҡылары янында төшкән фотолар һалырға, халыҡ ижады элементтары менән видеоролик яҙҙырырға тәҡдим ителә. Халыҡ йырҙарын, бейеүҙәрен башҡарырға, музыка ҡоралдарында уйнарға мөмкин. Флешмоб 15 сентябргә тиклем бара.

✓1 сентябрҙән мәктәп уҡыусылары һәм көндөҙгө бүлек студенттары Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһының ҡала яны поездарында ташламалы хаҡ менән йөрөү өсөн документтар һатып алырға мөмкин. Республикабыҙҙа ташлама 50 процент тәшкил итә. Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, ташламалы билет алыу өсөн уҡыусыларға - мәктәптән белешмә, студенттарға студент билеты талап ителә. Белешмәлә йәки студент билетында исем-шәриф, белем биреү учреждениеһының реквизиттары һәм юридик адресы күрһәтелергә, етәксенең мисәте, ҡултамғаһы булырға тейеш.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, ауыл хужалығы малдарын контролһеҙ көтөүгә ҡаршы көрәшеү маҡсатында малдарҙы көтөү һәм ҡыуыу тәртибен боҙған өсөн штрафтар күләме арттырылды. Граждандарға - 2000-4000 һум, вазифа биләгән кешеләргә - 7000-10000 һум, юридик шәхестәргә 20000-25000 һумға тиклем штраф һалыу күҙ уңында тотола. Ҡабаттан хоҡуҡ боҙған өсөн штраф күберәк: граждандарға - 4500-5000 һум, вазифа биләгән кешеләргә - 12000-15000 һум, юридик шәхестәргә - 30000-45000 һум.

✓Дәүләт Думаһының Ғаиләне яҡлау, атайлыҡ, әсәлек һәм балалыҡ мәсьәләләре буйынса комитеты 20 йылдан ашыуыраҡ йыл никахта торған ғаиләләргә аҡсалата ярҙам итеү тураһында закон проектын хупламай, тип белдерҙе комитет рәйесе Нина Останина (КПРФ). Шулай уҡ Министрҙар Кабинетының проектты хупламауы хаҡында ла хәбәр ителә.

✓"Бәләкәй ҡалаларҙы һәм тарихи ауылдарҙы үҫтереү" Бөтә Рәсәй форумы сиктәрендә IX Бөтә Рәсәй Уңайлы ҡала мөхитен булдырыуҙың иң яҡшы проекттары конкурсында еңеүсе йәмәғәт биләмәләре араһында Башҡортостандың Мәләүез ҡалаһы ла бар. 2022 йылда Мәләүез VII Бөтә Рәсәй уңайлы ҡала мөхитен булдырыуҙың иң яҡшы проекттары конкурсында "Мәләүездең сәскә атҡан яры" менән еңеү яулағайны. Төҙөкләндереү эштәре 2023 йылдың майында башланған. Проектты тормошҡа ашырыуға 154,5 млн һум йүнәлтелгән, шуларҙың 100 млн - федераль ҡаҙнанан.

ҠЫҪҠАСА

# ЯУГИРҘАРЫБЫҘ ЯНЫНДА...

**Радий Хәбиров эш сәфәре менән Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларында булды. Ул Башҡортостандың исемле батальондары һәм мобилизацияланған яугирҙар менән осрашты.** Үҙенең телеграм-каналында ул Миңлегәле Шайморатов исемендәге башҡорт ирекле батальоны яугирҙарының үҙе өсөн айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне, сөнки был Махсус операцияла ҡатнашыу өсөн республиканан тәүге ирекле формирование булды. "Был батальон ойошторолған көндән үк яуҙан сыҡмай. Ул Башҡортостандың хәрби еңеүҙәренең данлы тарихына үҙенең исемен яҙҙы тип әйтәләйем. Ошо ябай егеттәргә рәхмәт һәм ихтирам белдерәм, - тип яҙа Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Махсус хәрби операция биләмәһендәге ир-егеттәр менән аралашҡанда һәр саҡ төп һорауымды бирәм: ғаиләләре нисек, барыһы ла һәйбәтме? Ғәҙәттә, барыһы ла яҡшы, тип яуаплайҙар. Башҡалар иһә беҙҙән теге йә был мәсьәләне хәл итеүҙә ярҙам һорай. Ярҙам итербеҙ, республика Башлығы Хакимиәте, Хөкүмәт, "Ватанды һаҡлаусылар" фондының филиалы шуның өсөн эшләй".

✓ **Башҡортостан грипҡа ҡаршы 1,18 миллион доза вакцина алды, тип хәбәр итте республиканың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Елена Ғәлимуллина.** Улар федераль һәм республика бюджеты аҡсаһына һатып алынған һәм хәүеф төркөмөндәге кешеләргә бушлай прививка яһау өсөн тәғәйенләнгән. Ҙур предприятиелар ҙа үҙ иҫәбенә вакцинация үткәрә, тип билдәләне министр урынбаҫары. Быйыл Башҡортостанда 2,4 миллион кешегә (халыҡтың 60 проценты) прививка эшләнә, был дөйөм иммунитет барлыҡҡа килһен өсөн кәрәк. Мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, социаль хеҙмәтләндереү, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, йәмәғәт транспорты өлкәләрендә, шулай уҡ ҡошсолоҡ фабрикаларында эшләгәндәр грипҡа ҡаршы вакцинаны бушлай алырға хоҡуҡлы. Уҡыусыларға, колледж һәм юғары уҡыу йорттары студенттарына, 60 йәштән ололарға, хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларға прививка бушлай яһала. Эпидемиологтар һүҙҙәренсә, ҙур коллективтарҙа, өлкән йәштәгеләргә һәм хроник сирлеләргә прививка эшләтеү мотлаҡ.

✓ **Педагог һөнәренең абруйын күтәреү һәм йәш уҡытыусыларға ярҙам итеү маҡсатында 2019 йылдан Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың Указына ярашлы, ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусыларға гранттар булдырылды.** Йыл һайын конкурс йомғаҡтары буйынса еңеүселәр билдәләнә һәм йәш педагогтарға 690 мең һум күләмендә гранттар түләнә. Быйыл конкурсҡа иң күп ғаризалар Әбйәлил, Баҡалы, Бәләбәй, Бөрйән, Ғафури, Дыуан, Дүртөйлө, Ейәнсура, Илеш, Ҡариҙел, Ҡырмыҫҡалы, Туймазы һәм Өфө райондарынан килгән. Конкурста 35 йәшкә тиклемге йәш уҡытыусылар ҡатнаша ала. Улар халҡы 20 мең кешенән артмаған ауыл ерендә белем бирергә тейеш. Конкурс шарттарына ярашлы, еңеүселәр ауыл мәктәбендә кәм тигәндә 10 йыл эшләргә бурыслы. 2024 йылда конкурсҡа документтар 1 февралдән 31 майға тиклем ҡабул ителде. Бөтәһе 180 ғариза килгән. 11-28 июндә Эксперт комиссияһы ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусылар тәҡдим иткән белем биреү проекттарына һәм грантҡа дәғүә итеүселәрҙең һөнәри эшмәкәрлегендәге ҡаҙаныштарына баһа бирҙе. Ултырыш йомғаҡтары буйынса Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров БР Мәғариф һәм фән министрлығына киләһе йылда конкурста теләгән һәр кемдең ҡатнашыуын тәьмин итергә ҡушты.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШЛЫҠ ҺАЙЛАНДЫ!

**Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республикала уҙған төрлө кимәлдәге һайлауҙарға яҡынса йомғаҡ яһалды. Сентябрҙең 6-һынан 8-енә тиклем халыҡ Башҡортостан Башлығы, районлардағы урындағы совет депутаттары һәм 54-се Өфө бер мандатлы округы буйынса төбәк Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты өсөн тауыш бирҙе.**

Республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Азат Ғәлимханов хәбәр итеүенсә, яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, халыҡтың 72,34 проценты, йәғни 2,1 миллиондан ашыу кеше тауыш биргән. Башҡортостан Башлығын һайлау һөҙөмтәләре буйынса Радий Хәбиров ("Берҙәм Рәсәй" партияһынан тәҡдим ителде) 80,21 процент тауыш йыйҙы. Уның өсөн 1,72 миллиондан ашыу кеше үҙ тауышын биргән. Альберт Шәйнуров (Рәсәй Федерацияһының коммунистар партияһы) өсөн һайлаусыларҙың 6,95 проценты тауыш биргән. Иван Сухарев өсөн (Рәсәйҙең либераль-демократик партияһы) - 4,98 процент, Владимир Нагорный өсөн ("Ғәҙел Рәсәй" партияһы) - 4,26 процент, ә Илшат Тимерйәнов өсөн ("Яңы кешеләр" партияһы) 2,6 процент һайлаусылар үҙ тауышын биргән.

Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға өҫтәмә һайлауҙарҙа 54,55 процент тауыш менән Эльвира Мацкевич еңеү яулаған.

Башҡортостан Башлығы республика халҡына юғары һайлау мәҙәниәте өсөн рәхмәт белдерҙе. "Тауыш биреү барышы бик яҡшы ойошторолдо. Беҙ был һайлауҙарҙа еңдек, тип әйтә алабыҙ. Мин унда "Берҙәм Рәсәй"ҙең ҙур командаһы вәкиле булараҡ ҡатнаштым, - тине Радий Хәбиров. - Алда яңы бурыстар тора. Республика халҡына рәхмәт белдерәм. Улар сыҙамлыҡ һәм сабырлыҡ күрһәтте. Беҙ үҙ өҫтөбөҙгә алған барлыҡ йөкләмәләрҙе лә үтәргә тырыштыҡ. Ышанысығыҙ өсөн рәхмәт".

Төбәк етәксеһе шулай уҡ республиканың идара итеү командаһының, һайлау комиссиялары, хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм оператив хеҙмәттәрағзаларының ҙур ойоштороу эшен билдәләне. "Һайлау кампанияһы күңелле булды, ул еңел булмаған шарттарҙа үтте. Беҙ һеҙҙең менән берҙәм команда булып эшләнек. Шуныһы мөһим: алдағы биш йылға халыҡ төбәк һәм муниципаль идара итеү системаларының нигеҙен билдәләне, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров. - "Берҙәм Рәсәй" ҙур, лайыҡлы еңеү яуланы. Мин күп тапҡырҙар партия ағзаларының ҡатмарлы минуттарҙа һәр ваҡыт кешеләр янында булыуы хаҡында әйткәнем бар. Беҙ еңел булмаған этапты үттек, уҙған биш йыллыҡ эшебеҙ өсөн оят түгел".

Башҡортостан Башлығының инаугурацияһы 12 сентябрҙә үтте. Яңы һайланған төбәк етәксеһе үҙ вазифаһын ҡабул иткәндән һуң, республика Хөкүмәте отставкаға китә. "Беҙ идара итеүҙә бушлыҡ булдырмаясаҡбыҙ, бурыстарҙы үтәү тураһында указға ҡул ҡуйыла, һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Премьер-министр һәм уның урынбаҫарҙары кандидатураһы буйынса парламентыбыҙға тәҡдимдәр индерәсәкмен", - тине Радий Хәбиров.

Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Азат Ғәлимханов ҡайһы райондарҙа һайлауға килеү күрһәткесенең республика буйынса уртаса күрһәткестән юғары булыуын хәбәр итте. Баҡалы районында - 93,01 процент, Салауат районында - 89,95 процент, Тәтешлелә - 89,43, Федоровкала - 89,11 процент. Әлшәй, Асҡын, Благовар, Балтас, Бүздәк, Борай, Йәрмәкәй, Илеш, Ҡалтасы, Ҡыйғы, Ҡариҙел, Көйөргәҙе, Мишкә, Миәкә, Саҡмағош, Шаран райондарында халыҡтың 80 проценты тауыш бирҙе. Райондарҙа һайлауға килеү күрһәткесе уртаса 76,36 процентты тәшкил итте. Мәскәүҙә экстерриториаль участкаға 298 һайлаусы килде. Һайлауҙа 11 873 күҙәтеүсе эшләне. Закон боҙоу осраҡтары юҡ, тип билдәләне улар.

# ТӨП БУРЫС - ЯРҘАМ

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам йөҙөнән 45 миллион һумға яҡын аҡса йыйған. Был хаҡта республика парламенты рәйесе Константин Толкачёв фронттан ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡан Алексей Локотченко менән осрашыуҙа белдерҙе.**

"Бөгөн төп бурыстарҙың береһе - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү, - тип билдәләне Константин Толкачёв. - Депутаттар хәрби хәрәкәттәр зонаһына йыш бара, яугирҙар менән осраша. Беҙ һәр саҡ уларҙың ихтыяжы тураһында белеп торабыҙ, аҡса йыйып, кәрәкле әйберҙәр һатып алабыҙ. Депутаттар һәр хеҙмәт хаҡынан 45 миллион һум аҡса йыйҙы, был эште дауам итәбеҙ. Был - беҙҙең патриотик бурыс".

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Алексей Локотченко 2024 йылдың 13 февралендә Махсус хәрби операцияға юлланыу өсөн Рәсәй Оборона министрлығының ирекле корпусы менән контракт төҙөргә ҡарар итте. Үҙенә "Радий" тигән позывной алды. "Депутатыбыҙ, уның хеҙмәте менән ғорурланабыҙ, уны өлгө итеп ҡуябыҙ. Ватанын, халҡын яҡларға әҙер булған ҡыйыу яугир ул. Яҡташыбыҙҙың хәрби наградаларына ҡыуандым. Яу яланында алған яраларына ҡарамаҫтан, ул йәнә сафта, штурм отряды командиры урынбаҫары булып тора, фронттың алғы һыҙығында", - тине Константин Толкачев.

# ШӘП БУЛЫР ИНЕ!

**Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы республиканың 300 мең һумлыҡ Әсәлек (ғаилә) капиталын булдырырға тәҡдим итте.**

Дәүләт Йыйылышының һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветеран эштәре буйынса комитеты ултырышында ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Ирина Небогатова шундай тәҡдим менән сығыш яһаны. Ғаилә капиталын 2025 йылдың 1 ғинуарынан һуң өсөнсө балаһы тыуған йәки уны тәрбиәгә алған 35 йәшкәсә ҡатын-ҡыҙҙарға түләргә тәҡдим ителә. Бынан тыш, Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы йәш йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға, 24 йәшкә тиклемге студенттарға иҫәпкә торғандан алып сабый тыуғансы ай һайын төбәктәге ике йәшәү минимумы күләмендә аҡса - 28,3 мең һум түләргә тигән тәҡдим менән сыҡты. "Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветеран эштәре комитеты ултырышында беҙҙең министрлыҡ ғаиләгә ярҙам саралары тәҡдиме менән сығыш яһаны. Башҡортостанда был мәсьәләләргә ҙур иғтибар бирелә. Уларҙы тормошҡа ашырыу республика бюджетының мөмкинлектәренә лә бәйле. Әммә беҙ киләсәктә ошондай саралар тәҡдим итәбеҙ", - тине Башҡортостандың хеҙмәт министры Ленара Иванова.

Министр һүҙҙәренсә, әле төбәктә баланы тәрбиәгә алған ғаиләгә Әсәлек капиталы күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү ҡаралған. "Федераль Әсәлек капиталы күләмендәге сумма ғаиләгә һәр баланы уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алғанда түләнә, инвалид бала булһа, бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү 100 мең һумға арта", - тип өҫтәне Ленара Иванова.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостандың хеҙмәт министры Ленара Иванова сентябрҙә эшкә урынлашыу буйынса 120-нән ашыу сара ойошторолоуы тураһында белдерҙе. Уның билдәләүенсә, көҙҙөң тәүге ике айында хеҙмәт баҙарында әүҙемлек һәр ваҡыттағыса юғары, был иһә эште алмаштырыу йәки йәйге тәнәфестән һуң эшкә урынлашыу өсөн шәп ваҡыт. Мәҫәлән, ошо арала вакансиялар йәрминкәләре, асыҡ кадрҙар һайлап алыу һәм эш биреүселәр менән осрашыуҙар ойоштороласаҡ.

✓ "Рәсәй - спорт державаһы" XII халыҡ-ара форумында ҡатнашыу өсөн 400-ҙән ашыу ирекмән ғариза биргән. Спорт форумы 2024 йылдың сентябрь-октябрь айҙарында Өфөлә ойоштороla. Был сара тотош Башҡортостан спорт йәмәғәтселеге өсөн ысын мәғәнәһендә байрам булмаҡсы. Форумда ҡатнашыу өсөн ирекмәндәр йыйыу дауам итә. Улар түбәндәге йүнәлештәр буйынса ярҙам күрһәтә: оҙатып йөрөүсе, аккредитация ирекмәне, ирекмәндәр координаторы, халыҡ ағымы координаторы, матбуғат хеҙмәте ирекмәне.

✓ Башҡортостан спортсылары V Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындарында тәүге миҙалдар яуланы. Хәбәр ителеүенсә, билбау көрәшендә Алёна Фәтихова көмөш миҙал алды, ә Камилла Зөлҡәрнәева ошо спорт төрөндә бронза призер булды (тренер Рөстәм Зыяҡаев). Тәүге тапҡыр ҡатнашҡан Ләйлә Шаһисолтанова ла мас-рестлингта "көмөш" яуланы (тренерҙар Рәил Бикмаев, Закариаш Шиока). Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 8 сентябрҙә Астанала Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындары башланды. Ярыштар 13 сентябрҙә тамамлана. Турнирҙа илебеҙҙән 209 кеше ҡатнаша. Башҡортостан делегацияһы һан яғынан икенсе урында, уның составында 26 спортсы бар.

✓ Францияла йәйге XVII Паралимпия уйындары тамамланды. Рәсәйҙең йыйылма командаһы иҫәбендә 64 миҙал: 20 алтын, 21 көмөш һәм 23 бронза награда. Башҡортостан спортсылары алты миҙал яуланы. Рәсәй донъя ярыштары йомғаҡтары буйынса һигеҙенсе урынды алды. Ҡытай спортсылары 220 награда менән (94 алтын, 76 көмөш һәм 50 бронза) беренсе урында. Икенселә - Бөйөк Британия, уның иҫәбендә 124 миҙал (49, 44, 31). Өсөнсө урында американдар килә, уларҙа 105 миҙал (36, 43, 27).

✓ "Аэрофлот" авиакомпанияһы бортта туҡланыу менюһына туңдырма индерҙе. Хәҙер эҫе климатлы илдәргә осҡан рейстарҙа пассажирҙарға төп ризыҡтан һуң пломбир туңдырмаһын тәҡдим итәләр. Әлегә Башҡортостанда етештерелгән десерт менән Мәскәүҙән Малеға, Бангкокҡа һәм Пхукетҡа осҡан ваҡытта һыйланырға мөмкин. Десертты Шереметьево аэропортынан башҡа алыҫ рейстарға ла индерергә ниәтләйҙәр, тип хәбәр итә авиакомпанияның матбуғат хеҙмәте.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *"Башавтотранс"ты техник яҡтан нығыттыҡ һәм водителдәрҙең берҙәм коллективын булдырҙыҡ. Бөгөн бында урындағы халыҡ эшләй, ә был беҙҙең төп байлығыбыҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды төбәк етәксеһе Радий Хәбиров.*



# ҺАУЛЫҠТЫ ҠАЙҒЫРТЫУ КӘРӘК

**2024 йылдың тәүге ете айында Башҡортостанда миллиондан ашыу кеше диспансерлаштырыу үткән. Иҫкәртеү тикшереүҙәренә 73 медицина ойошмаһы һәм 30 мобиль медицина бригадаһы йәлеп ителгән. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итте.**

2024 йылда Башҡортостанда эшләүсе халыҡтың һаулығын яҡшыртыуға йүнәлтелгән бер нисә башланғыс тормошҡа ашырыла. Был өлкәләге яңылыҡтарҙың береһе булып Өфөләге 13-сө ҡала клиник дауаханаһы базаһында "Сәнәғәт медицинаһы үҙәге"н асыу тора. Үҙәк ҙур сәнәғәт предприятиелары хеҙмәткәрҙәре араһында профилактик медицина тикшереүҙәренең һөҙөмтәлелеген арттырыу өсөн булдырыла. Сәнәғәт медицинаһы үҙәгенең эше һөҙөмтәлелеген иҫбатлаған да инде: 2024 йылдың ете айында бында 22 меңдән ашыу кеше медицина тикшереүе үткән. Тикшереүҙәрҙең 2 меңдән ашыу осрағы асыҡланған, улар иҫәбендә - ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары, шәкәр диабеты һәм яман шештәр.

Иҫкәртеү сараларын киңәйтеү өсөн алты күсмә медицина комплексы һатып алынған. Улар тикшереүҙәрҙе предприятиеларҙа үткәреү мөмкинлеген бирә, был, үҙ сиратында, медицина хеҙмәттәре менән ҡулланыуҙы уңайлыраҡ һәм тиҙерәк итә. Бынан тыш, Башҡортостан Хеҙмәтсәндәрҙең һаулығын нығытыу компетенциялары үҙәге булдырылды. Бөгөн 134 корпоратив программа эшләй. Хеҙмәткәрҙәрҙең һаулығын һаҡлау һәм уны яҡшыртыуға йүнәлтелгән бындай корпоратив программаларҙың төп маҡсаты - ауырыуҙарҙы иҫкәртеү, иртә асыҡлау һәм сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау юлы менән сирҙәрҙең, бигерәк тә хроник ауырыуҙарҙың, таралыу хәүефен кәметеү.

2024 йылда шулай уҡ Дәүләт гарантиялары программаһы киңәйтелә, был эш биреүселәргә урындарҙа диспансер күҙәтеүе үткәреү мөмкинлеген бирә. Бының өсөн предприятие етәкселәре хеҙмәткәрҙәр исемлеген төҙөй, медицина ойошмалары менән тикшереү графигы һәм форматы хаҡында килешә.

# ЕРҘЕ СҮП БАҪМАҺЫН!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе маҡсатлы файҙаланыу мониторингы һөҙөмтәләре тикшерелде.**



Россельхознадзорҙың төбәк идаралығы етәксеһе Руслан Байкеев хәбәр итеүенсә, республиканың ауыл хужалығы ерҙәренең майҙаны - 6,2 миллион гектар, шул иҫәптән 209 мең гектары - әйләнешкә индереү өсөн потенциаль һөрөнтө ерҙәр. Ведомство ер ҡануниәтен боҙоуҙарҙы асыҡлау буйынса даими эш алып бара. 2023 йылда 650 ер участкаһында 149 пландан тыш күсмә тикшереү үткәрелгән. "Дөйөм алғанда 75 мең гектарҙан ашыу майҙан тикшерелде, шул уҡ ваҡытта 74 мең гектарҙан ашыу майҙанда сүп үләндәре һәм ағас-ҡыуаҡлыҡтар үҫеүе асыҡланды. Ер участкалары хужаларына хоҡуҡ боҙоуҙарға юл ҡуймау тураһында 315 иҫкәртеү иғлан ителде, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Руслан Байкеев. - Күрелгән саралар һөҙөмтәһендә ауыл хужалығы әйләнешенә быйыл файҙаланылмаған 10 мең гектарҙан ашыу ер ҡайтарылды".

Билдәләнеүенсә, 2024 йыл башынан алып Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы белгестәре дөйөм майҙаны 25 мең гектарҙан ашыу 160 ер участкаһында хоҡуҡ боҙоуҙарҙы асыҡлаған. 3 мең гектарҙан ашыу элек файҙаланылмаған ерҙәр ауыл хужалығы әйләнешенә индерелгән. Бынан тыш, ведомство ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәргә ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар тупланған рөхсәтһеҙ урындарҙы ла контролдә тота. Мәҫәлән, 2023 - 2024 йылдарҙа 116 сүплек асыҡланған, уларҙың 51-е юҡҡа сығарылған.

Башҡортостан Башлығы муниципалитет етәкселәренә ер ҡануниәтен боҙоуҙарҙы асыҡлау һәм файҙаланылмаған ерҙе әйләнешкә йәлеп итеү буйынса эште көсәйтергә ҡушты. "Республикала эшкәртелмәгән ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр булырға тейеш түгел, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Инвесторҙар тәү сиратта ер менән ҡыҙыҡһына. Юҡ тип яуап бирәбеҙ, ә беҙҙә ул бар. Барлыҡ ерҙәр ҙә эшләргә тейеш".

# АВТОБУСТАР ШӘП!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Өфө-Арена" спорт комплексы майҙансығында "Башавтотранс"тың Өфө һәм Нефтекама филиалдары етәкселәренә ҙур һыйҙырышлы 88 яңы "НЕФАЗ" автобустары асҡыстарын тапшырҙы.**



Төбәк етәксеһе шунда уҡ автобустарҙың береһе менән танышты. Нефтекама автозаводының 92 кеше һыйҙырышлы яңы машиналары газ-мотор яғыулығы менән эшләй. Салондары видеокүҙәтеү системалары, тахографтар, спутник навигацияһы, мәғлүмәт таблолары һәм тауыш автоинформаторҙары, USB-порттар менән йыһазландырылған. Автобустарҙа шулай уҡ пандустар ҡуйылған һәм инвалид коляскаһы өсөн махсус урын ҡаралған. "Һуңғы биш йылда "Башавтотранс" өсөн 1 400-ҙән ашыу автобус һатып алдыҡ. Парк тулыһынса тиерлек яңыртыла. Элек предприятие ҡатмарлы финанс хәлендә ине. Әммә беҙ "Башавтотранс"ты техник яҡтан нығыттыҡ һәм, иң мөһиме, водителдәрҙең берҙәм коллективын булдырҙыҡ. Бөгөн бында башлыса урындағы халыҡ эшләй, ә был беҙҙең төп байлығыбыҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Республика пассажирҙар ташыу өсөн автобустар һатып алыу буйынса эште дауам итәсәк. Һәм был мәсьәләгә принципиаль ҡараштабыҙ - илебеҙҙә етештерелгән яҡшы машиналар һатып алына".

*ҠЫҪҠАСА*

# БАЛАЛАР ТУҠЛАНЫУЫ...

**Стәрлетамаҡҡа эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Иң яҡшы мәктәп ашханаһы - 2024" Бөтә Рәсәй конкурсының республика этабында еңеүсе туҡланыу операторҙары күргәҙмәһе менән танышты.** Мәҫәлән, ауыл мәктәптәре араһында Благовар районы Языково ауылының урта дөйөм белем биреү мәктәбе иң яҡшыһы тип танылды. Бында "Опторг" компанияһы әҙер төшкө ашты дүрт ҡатлы герметик төргәктәге реторт-пакеттарҙа тәҡдим итә. Өфө мәктәптәре араһында иң яҡшыһы тип 1-се лицейҙың ашханаһы танылды. "Балалар һәм диетик туҡланыу үҙәге" - Башҡортостандың баш ҡалаһының 128 мәктәбен һәм 221 балалар баҡсаһын хеҙмәтләндергән ҙур операторҙарҙың береһе. "Иң мөһиме - ҡайнар аш менән тәьмин итеүҙе һәм сәләмәт туҡланыуҙы яйға һалдыҡ, - тине Башҡортостан Башлығы. - Биш йыл элек мәктәп ашханаларының ни бары 15-20 процентында ғына урындағы ит тәҡдим ителгән булһа, хәҙер ашханаларҙың күпселегендә - үҙебеҙҙең етештереүселәр килтергән тәмле һәм файҙалы ит".

✔ **Сентябрҙә Дәүләт Думаһы күсемһеҙ милек менән килешеү төҙөгәндә яңғыҙ кешеләрҙе мутлашыусыларҙан яҡлауға йүнәлтелгән закон проектын ҡарай.** Документты Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары әҙерләп, федераль парламентҡа индергән. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һыҙҙаренсә, закон проекты фатирҙы бүләк итеү килешеүҙәрен рәсмиләштергәндә мутлашыусыларҙан яҡлауҙы күҙ уңында тота. Яҡын туған булмаған кешеләр менән төҙөлгән бүләк итеп биреү килешеүҙәрен мотлаҡ нотариаль раҫларға тәҡдим ителә. Ғәмәлдәге бүләк итеү тәртибе күп функциялы үҙәктә тейешле ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйыуға ғына ҡайтып ҡала. Был иһә мутлашыусыларға һаулығы ҡаҡшаған яңғыҙ ҡарттарҙы, шулай уҡ наркотиктарға һәм алкоголизмға бәйлелектән яфаланған граждандарҙы алдарға мөмкинлек бирә. Бынан алдараҡ проект Рәсәй Закон сығарыусылар советының һынғай һығымтаһын алды. Дәүләт Думаһының дәүләт төҙөлөшө һәм ҡануниәт буйынса комитеты ла документты хупланы.

✔ **Ишембай ирекмәндәре махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн пилотһыҙ осоу аппараттары етештерә башлаған.** Дрондар һынауҙарҙы уңышлы үткән һәм тиҙҙән фронтҡа оҙатыласаҡ. Дрондарҙы IT-технологиялар менән янып йәшәгән ишембайҙар Рәмил Йәнишев һәм Альберт Яманаев йыя. Улар бер нисә ҡорамал әҙерләгән дә инде. Дрондарҙың тәүге партияһын етештереүҙә Түбәнге Әрмет ауылы халҡы ярҙам иткән, улар кәрәкле деталдәр, материалдарҙы килтергән, шулай уҡ аҡса йыйып тапшырған. Яҡын арала дрондар хәрби частарҙың береһенә тапшырыласаҡ. Улар алғы һыҙыҡта өҫтәмә һынау үтәсәк. Һалдаттарҙың баһаларын иҫәпкә алып, хаталарҙы төҙәтеү буйынса эш алып барыласаҡ. "Ни өсөн беҙгә төрлө типтағы дрондар һәм 3D-баҫма эшләргә кәрәк? Сөнки был хәҙерге хәрби бәрелештәрҙең ааүһыҙ талабы. Пилотһыҙ хәрби техника көндәлек тормошҡа үтеп инде. Ә Төньяҡ хәрби округында беҙҙең һалдаттар ошондай уҡ приборҙар төҙөүгә өлгәшә, землянкаларҙа 3D-баҫма остаханалары аса икән, тыныс шарттарҙа шул уҡ эште башҡармау өсөн ниндәй һылтау таба алабыҙ", - тип билдәләне ирекмәндәр.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Таш ҡабаҡ

Таш ҡабаҡ (кабачок) бер йыллыҡ үҫемлек, июнь-июлдә сәскә ата. Унда калий һәм натрийҙың нисбәте 100:1 булыуы дауаланыуҙа бик яҡшы. Йәшелсәлә калориялар һәм күҙәнәклек аҙ. Баҡыр һәм башҡа микроэлементтарға бик бай. Оҙаҡ һаҡлағанда витаминдар миҡдары кәмей. Дауаланғанда йәшелсәне һәм орлоғон ҡулланалар. Йәш таш ҡабаҡтың ҡабығында файҙалы матдәләр күп. Уны йөрәк-ҡан тамырҙары, ашҡаҙан, бауыр һәм бөйөр ауырыуҙарын дауалағанда, матдәләр алмашыныуын яҡшыртыу, ҡанда холестеринды кәметеү өсөн файҙаланалар. Атеросклероз, һимеҙлек, эс ҡатҡанда, шешенгәндә лә ашау файҙалы.

❖ Глистарҙан 50 грамм әрселгән таш ҡабаҡ орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, утта тағы ла 15 минут ҡайнатырға. 2 сәғәт һыу парында төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашаған арала көнөнә 2-3 тапҡыр ас ҡарынға яртышар ятакан эсергә.

❖ Шәкәр диабетынан киптерелгән таш ҡабаҡ орлоғон әрсеп, иҙергә һәм бер аҙ бал менән һыу ҡушырға. Йәшкелт кенә шыйыҡса килеп сығырға тейеш. Шәкәр диабеты әҙемтәһендә бөйөр һәм бауыр эшмәкәрлеге боҙолғанда эсергә. Көн һайын йәки көн аша эсергә, ә шыйыҡсаны һәр ваҡыт яңынын эшләргә. Шулай уҡ шәкәр диабеты арҡаһында уҡшығанда таш ҡабаҡтың йомшағын ҡырғыстан үткәреп, һутын һығып алырға һәм көнөнә 2 тапҡыр яртышар стакан эсергә була.

## Алма

❖ Тире майлы булғанда алмаларҙың ҡабығын әрсеп, ҡырғыстан үткәрергә һәм 1 ҡалаҡ зәйтүн майы, һөт йәки ҡаймаҡ, 1 йомортҡа ағы ҡушырға. Яҡшы болғатып, биткә һыларға һәм 15 минут тоторға. Битлекте йылы һыу менән йыуып төшөрөргә.

## Лимон

❖ Гипертония (ҡан баҫымының күтәрелеүе) булғанда ярты лимонды ҡабығы менән ҡуша тәүләгенә 3-4 тапҡыр ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Шылтыратыусы үҙен энергия һатыу компанияһы хеҙмәткәре тип таныштырыуын, уның оло йәштәгеләр өсөн иҫәпләү күрһәткестәрен тапшырыу уңайлы булһын өсөн ҡушымта әҙерләнеүен белдереүен хәбәр итә.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Тартай, тарттарт
(Коростель)



Тартай һымаҡтар ғаиләһенә ҡарай. Барҡылдаҡтан саҡ ҡына ҙурыраҡ. Башы, арҡаһы ерән төҫтә, сыбар, муйынының алғы яғы аҡһыл. Түше һәм боғағы һоро. Ата һәм инә ҡош бер үк төҫтә, бары тик инә тартайҙың түше һарыраҡ. Кәүҙәһенең оҙонлоғо 27-30 см.

Яҙын тартайҙың "тарт-тарт" тип ҡысҡырыуы әллә ҡайҙан ишетелеп тора, әңер төшкәс тә ҡысҡыра башлай ҙа, иртән таң һыҙылғанса тап ошолай тип ҡабатлай ҙа ҡабатлай.

Бөйөк Британиянан алып Байкал аръяғына тиклемге киңлектәрҙә киң таралған. Урманлы далаңы үҙ итә.

Көньяҡ Уралда йылға үҙәндәрендә йәшәй. Үлән бейек булып үҫкән сабынлыҡ ерҙәрендә, яландарҙа, ташландыҡ ауыл урындарында оя ҡора. Урал аръяғында дала өҫтөнлөк иткән райондарға ҡарағанда, урманлы далаларға бай төбәктәрҙә йышыраҡ осрай. Йыл ҡоро килгәндә батҡыл урындарҙа йәшәй. Өфө тирәһендә лә тартай бар, хатта "Башҡортостан урмансылары паркы"нда ла туй осоронда ата тартайҙың тауышын ишетә алаһығыҙ.

Кеше күҙенә салынып бармай, был ҡоштоң барлығын бары тик тауышы ғына белдереп тора. Май айында ҡоштарҙың туй осоро башлана, тап ошо мәлдә ата тартайҙың тауышы яңғырап тора ла инде. Орнитологтар был ҡоштарҙың парлап йәшәмәүе лә ихтимал тигән фекерҙә. Инә ҡош ояһын ҡуйы үлән араһына, ҡоро ергә ҡора. 7-12 йомортҡа һала, 17-19 көн баҫа. Ата тартай менән сиратлап баҫалар тигән фараз да бар. Ә бына бәпкәләр сыҡҡас, уларҙы инә ҡош ҡына "тәрбиәләй". Бер айҙан йәш ҡоштар оса башлай.

Бөжәктәр, моллюскылар, селәүсендәр, тәлмәрйендәр, ваҡ ҡоштарҙың йомортҡаһының ҡабығы менән туҡлана. Рационында орлоҡтар ҙа бар.

Август-сентябрь башында йылы яҡҡа осоп китә. Ҡоштар яңғыҙ, төнөн оса. Шуға ла ҡышлау еренә тартай атлап бара тигән ҡараш таралған. Ул ысынлап та насар оса, күп ерҙе атлап-йүгереп тә уҙалыр, тик күпселек юлды осоп бара. Африканың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә ҡышлай. Рәсәйҙә һаҡлауға мохтаж ҡоштар исемлегендә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КӨҘ БАШЫНАН - ЯҢЫ ҠАНУНДАР

**Гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына ошо йылдың 1 сентябренән көсөнә ингән ҡайһы бер законлар хаҡында ҡыҫҡаса белешмә тәҡдим итәбеҙ.**



## Эш сәғәтенән тыш эшләгән өсөн

1 сентябрҙән өҫтәмә рәүештә башҡарылған эш өсөн иҫәпләшеү тәртибе үҙгәрҙе: эш биреүсе был осраҡта артыҡ сәғәттәр өсөн компенсация йәки дәртләндереү түләүҙәрен иҫәпкә алырға тейеш. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: норманан тыш эштең тәүге ике сәғәте өсөн - 1,5 тапҡыр, ә ҡалған ваҡыт өсөн икеләтә күләмдә түләү ҡарала. Ошоға тиклем түләү күләме оклад менән премияны үҙ эсенә алған уртаса эш хаҡына ҡарап түләнә ине, хәҙер бында башҡа төр өҫтәмә түләүҙәр ҙә индерелә. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәткәр аҡса урынына үҙ теләге буйынса ял көнө алырға ла хоҡуҡлы. Компанияларҙа коллектив йәки хеҙмәт килешеүе буйынса норманан тыш эш өсөн күберәк түләү күләмен үҙҙәре лә билдәләй алалар.

## Хәүеф өсөн - өҫтәмә

Рәсәй Банкы 1 сентябрҙән ҡулланыу кредитын ҡайтарыу гарантияһы расланмаған осраҡтарҙың хәүеф коэффициентына өҫтәмәне арттырҙы. Был заемсыларҙың бурыс йөкләмәләре артыуын сикләү маҡсатында эшләнә. Быйыл Үҙәк банк ҡайтарыу гарантияһы расланмаған ҡулланыу кредиттары буйынса бурыстарҙың 18-20 процентҡа артыуын билдәләй. Был иһә халыҡтың килем хәленән күпкә артып китә һәм граждандарҙың бурыс йөкләмәһе үҫә барыуына сәбәп булып тора.

## Ипотека торлағын һатыу

Ипотека буйынса бурыслы заемсылар 11 сентябрҙән залогта булған торлаҡты үҙҙәре һата ала. Шулай итеп, финанс проблемалары булған заемсылар ипотека торлағын һатып, суд һәм сауҙалашыу процедураһынан ҡотола ала. Ләкин фатирҙы һатыу тураһында банкка ғариза менән банк әле заемсыны судҡа биреп өлгөрмәгән осраҡта ғына мөрәжәғәт итергә мөмкин. Банк бурыслының ғаризаһын алғас, 10 көн эсендә мәсьәләне кире йә ыңғай хәл итә. Ипотека торлағын һатыу ваҡыты - дүрт ай, ләкин яҡтарҙың килешеүе буйынса был ваҡыттың оҙайтылыуы ла мөмкин.

## Таксистар яуаплылығы

1 сентябрҙән такси автопарктары йәки үҙмәшғүл таксистар, пассажирҙар йөрөтөүсе булараҡ, улар алдында үҙҙәренең яуаплылыҡтарын страховкаларға бурыслылар. Йәғни берәй юл-транспорт ваҡиғаһы була ҡалып, унда таксистың ғәйебе булмаһа ла, пассажир страховкалаусынан 2 миллионға тиклем компенсация алаҫаҡ. Ошоға тиклем таксист ғәйебе менән автомобиль юл ҡазаһына осраған хәлдә пассажир ни бары 500 мең һум компенсацияға иҫәп тота ала ине. Хәҙер такси йәмәғәт транспортына тиңләштерелде. Автобус водителе, мәҫәлән, ике страховка: ОСАГО һәм ОСГОП полистарына эйә. ОСАГО - юл ҡазаһы үҙенең ғәйебе буйынса булһа, ОСГОП - пассажир зыян алған бөтә башҡа төр осраҡтар өсөн.

## Ҡунаҡхана хеҙмәте

Ай башынан шулай уҡ өҫтәмә хаҡҡа һалым (НДС) 0 процент ставка буйынса ҡунаҡхана хеҙмәттәре төрҙәре арттырылды. Был исемлеккә тренажер залы, SPA-хеҙмәттәре, интернет менән файҙаланыу, конференц-залдар, һаҡ ҡуйылған автотуҡталҡа инә. Был төр менән ("нулевой" НДС) бөтөн ошо хеҙмәттәр ҡунаҡханала йәшәү хаҡына индерелгән осраҡта файҙаланырға була.

## Шулай уҡ:

Элемтә операторҙарына тариф пландарын үҙгәртеү тыйыла. Ай башынан телефон бәйләнеше хеҙмәттәре күрһәтеүҙең яңы ҡағиҙәләре: шылтыратыуҙар, СМС-хәбәрҙәр, интернет менән файҙаланыу һәм башҡалар ғәмәлгә инде. Иң мөһиме: элемтә операторҙары клиенттың ризалығынан тыш тариф планын үҙгәртә алмаясаҡ. Тариф планына ингән хеҙмәттәрҙе кире ҡарарға ярамаясаҡ. Мәҫәлән, әгәр клиент лимитһыҙ шылтыратыуҙарға эйә икән, уның ризалығынан башҡа элемтә операторы уны һүндереп ҡуя алмай. Ә бына абонент түләүҙәрен, йәғни тарифтың үҙен компания элеккесә бер яҡлы тәртиптә арттыра ала.

## Инвалидҡа - өҫтәмә ял

Ай башынан шулай уҡ инвалид хеҙмәткәрҙәргә йыл һайын тәғәйен түләүле отпуск йылына 30 календарь көндән дә кәм бирелмәйәсәк. Был көндәрҙе хеҙмәткәр өлөшләп тә алырға мөмкин. Ләкин уның бер өлөшө 14 көндән дә кәмерәк булмаһын. Бынан тыш, ай башынан төбәк властары ойошмаларға инвалидтарҙы эшкә алыу буйынса квота билдәләй алаҫаҡ. Квотаның иң кәме - хеҙмәткәрҙәрҙең уртаса һанынан - 2, иң күбе - 4 процент.

## Мәктәптәге үҙгәрештәр

Белем биреү учреждениеларында ла сентябрь яңы ҡағиҙәләр менән башланып китте. Хәҙер уҡыусыларға мәктәптә планшет һәм смартфондар менән файҙаланыу тыйыла, әгәр балаларҙың һәм педагогтарҙың ғүмеренә һәм һаулығына ҡурҡыныс янамаһа. Шулай уҡ белем биреү учреждениелары бинаһында һәр ваҡыт РФ дәүләт флағы элениеп торорға тейеш. Башланғыс һәм урта мәктәптәрҙә белем биреү программаһына хеҙмәт дәрестәре ҡайтарылды.

АЛДАЙҘАР!

# МУТТАРҘЫҢ ЯҢЫ АЛЫМЫ



**Республикала оло йәштәгеләргә иҫәпләнгән яңы мутлашыу ысулы барлыҡҡа килгән: мутлашыусылар үҙен торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр менән бәйле компания хеҙмәткәрҙәре тип таныштыра!**

Өфө ҡалаһы буйынса 6-сы полиция бүлегенә 75 йәшлек пенсионер ғариза менән мөрәжәғәт итте. Ул билдәһеҙ номерҙан шылтыратыуҙарын, шылтыратыусы үҙен энергия һатыу компанияһы хеҙмәткәре тип таныштырыуын, уның республикалағы барлыҡ оло йәштәгеләр өсөн иҫәпләү күрһәткестәрен тапшырыу уңайлы булһын өсөн ҡушымта әҙерләнеүен белдереүен хәбәр итә. Бынын өсөн ойошмаға шәхси мөрәжәғәт итеү талап ителмәй, программаға мәғлүмәт индереү генә етеүен әйтә һәм үҙенең ярҙамын тәҡдим итә. Һөҙөмтәлә мутлашыусы пенсионерҙы мобиль ҡоролмала экранды күрһәтеү функцияһын тоташтырырға күндерә.

Артабан ул смс-кодтар ярҙамында пенсионерҙың мобиль банкы ҡушымтаһына инә. Оло йәштәге ирҙең иҫәбенән үҙенә 500 мең һум аҡса күсерә һәм бәйләнеш өҙәлә. Аҡса енәйәтселәрҙең кеҫәһендә булғандан һуң, һөйләшеү туҡтатыла. Зыян күреүсе бер ниндәй ҙә яңы ҡушымта ҡуйылмағанын, картанан аҡса урланғанын күреп, полицияға мөрәжәғәт иткән.

Ошондай уҡ ғариза менән Өфөнән 72 йәшлек пенсионер ҡатын мөрәжәғәт итте. Зыян күреүсегә шулай уҡ ялған хеҙмәткәрҙәр шылтыратып, иҫәпләү ҡоролмаларын алмаштырырға һәм ҡушымта ҡуйырға тәҡдим итә. Һуңынан экранды күрһәтеү функцияһын тоташтырырға күндереп, үҙ иҫәптәренә 900 мең һум аҡса күсерә.

Әлеге ваҡытта мутлашыу фактары буйынса Рәсәй Федерацияһы Енәйәт Кодексының 158-се статьяһы буйынса енәйәт эштәре ҡуҙғатылған. Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы иҫкәртә:

"Хөрмәтле граждандар! Шылтыратыусыларға ышанмағыҙ. Ойошма хеҙмәткәрҙәре мессенджерҙағы клиенттар менән бәйләнешкә инмәй. Таныш булмаған кешеләргә экранды күрһәтеү функцияһы аша мобиль ҡоролмағыҙға инеү мөмкинлеген бирмәгеҙ - был мутлашыусыларҙың эше! Һаҡ булығыҙ! Оло йәштәге туғандарығыҙҙы һәм таныштарығыҙҙы был мутлыҡ схемаһы тураһында иҫкәртегеҙ!"

**Башҡортостан Республикаһы Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

✓ *Эссен идара иткән ваҡытта төбәктә власты законһыҙ файҙаланыу бик ныҡ артып китә: типтәр полктарына килтерелгән рекруттарҙы тикшереп тормайҙар - сибектәр, сирлеләр һәм хроник ауырыулылар ҙа хеҙмәткә алына.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**П.К. Эссен**

**(1817 - 1830 йылдарҙа губернатор булған).**

Ошондай ялған хәбәрҙәргә ышанған крепостной крәҫтиәндәр үҙҙәре йәшәгән ерҙәрҙән күсеп китә башлай; ундағы властар бер ни ҙә ҡыла алмай; меңәрләгән халыҡ төркөмдәре Ырымбурға йүнәлә; Ырымбур һәм Уральск казактарының бер нисә полкын юл буйҙарына сығарып, күскенселәрҙе элекке йәшәгән урындарына кире ҡайтарып ебәрергә ҡушыла; шулай ҙа бер нисә партия Ырымбурға тиклем барып етә, уларҙың һәр бер нәмәгә үтә тиҙ ышанып барыусы иптәштәре, ябай халыҡ менән аралаша башлағас, кеҫәл ярлы һөт йылғаларының булмауына инана.

Эссен идара иткән ваҡытта төбәктә власты законһыҙ файҙаланыу бик ныҡ артып китә: типтәр полктарына туранан-тура килтерелгән рекруттарҙы ентекләп тикшереп тормайҙар - сибектәр, сирләләр һәм хроник ауырыулылар ҙа хеҙмәткә алына; бындайҙарҙы күрмәһендәр өсөн ришүәт бирелә; аттар атлы стройға яраҡһыҙ булып сыға; һоло бөтөнләйгә бирелмәй, ә уның өсөн бүленгән аҡса полк командиры кеҫәһендә ҡалып, күңелле тормош өсөн сарыф ителә; бесән күп булған хәлдә лә йөҙ баштары булған командирҙар ҙа шулай уҡ нимәне булһа ла үҙ мәнфәғәттәре өсөн үҙләштерергә ынтыла, шуға күрә аттар ҡыш әйләнәһенә һаламда ғына тотола, ә яҙ еткәс, Ырымбурға барырға кәрәк булғанда, ҡауҙаулы аттарҙың күп булыуы беленә.

Шуға күрә лә полктар Ырымбурға бер юлы инмәй; бер полктың ауырыу аттары икенсе бер полктың таҙа аттарына, йә иһә ҡаҙна аттары булған казак артиллерияһыныҡына алыштырыла.

Генерал Эссен Урал йылғаһы ярында, Преображенский соборы янында, вафат булып ҡалған император Александр 1-се ҡунып киткән, ҡаҙна мөлкәте булған губернатор йортонда йәшәй. Был өйҙөң стенаһына ошо ваҡиға хаҡында алтын хәрефтәр менән яҙылған таҡта беркетелгәйне, уны мин үҙем уҡығаным булды. Был ваҡиға 30-сы йылдарҙың икенсе яртыһында булғандыр, тип уйлайым, был саҡта мин уҡый белә инем һәм миңә иптәштәрем менән шулай йыраҡҡа йөрөргә рөхсәт итәләр ине.

Был өй һүтелеп алына һәм 1840 йылда генерал-губернаторҙар өсөн яңыһы һалына, ә 1885 йылдан башлап бында ҡаҙна палатаһы урынлаша.

Эссен Ырымбурҙа яңғыҙы ғына йәшәй һәм байрам тантаналары булғанда аш мәжлестәре уҙғара, бында хеҙмәти әһәмиәте яғынан күренекле кешеләр саҡырыла. Ябай көндәрҙә уның аш мәжлестәренә уға көн һайын ординарец итеп тәғәйенләнгән офицерҙар саҡырыла, унан һуң да ошондай ҡағиҙә үтәлеп килә, әммә Перовский ваҡытында бындай мәжлестәр туҡтатыла, һәм офицерҙар үҙҙәре лә махсус рәүештә кейенеп-яһанып йөрөмәй.

Һөйләүҙәренә ҡарағанда, Эссен Петербургта хөрмәт ҡаҙанмай һәм уның йоғонтоһо тойолмай. Уның тәҡдиме менән бүләкләүҙәр һирәк була; хәрбиҙәрҙе күтәрмәләү билдәләнгән тәртипкә ярашлы башҡарыла. Ырымбур казак ғәскәрендә ғәскәр канцелярияһында хеҙмәт итеүсе штаб-офицерҙар ике кеше генә була, ә үҙгәрешһеҙ ҡала биргән полк командирҙары, Эссендың тәҡдиме ыңғай рәүештә хәл ителһен өсөн аҡса йыйып, билдәле бер кеше аша Петербургҡа ебәрә.

Белемле офицерҙар һәм чиновниктар аҙ була; улар иҫәбенә донъяуи тәрбиә алған кешеләр инә, улар адъютанттар хеҙмәтендә йөрөй, әммә эш менән шөғөлләнмәй; хат яҙыуалышыу хәрби писарҙарға һәм дежур штаб-офицеры һәм штаб начальнигы күҙәтеүе аҫтында ғәскәрҙән яҙыу эштәрен алып барыу өсөн саҡыртып килтерелгән казак урядниктарына йөкмәтелә. Шулай ҙа был вазифаларҙа ла һәр осраҡта үҙенә тәғәйенләнгән эшкә тура килгәндәр булмай, мәҫәлән, оҙаҡ йылдар бригада командиры булған һәм ул саҡта ҡөлгә тип аталған казак станицаһында йәшәгән генерал Мистров; дежур штаб-офицеры, майор Матерн, уны генерал Перовский, кабинетында тиҙ арала кәрәк була торған ҡағыҙҙы яҙырға ҡушып, тегеһе шуны бер нисек итеп тә төҙөй алмағаны өсөн вазифаһынан бушата.

Губернатор канцелярияһы чиновниктары ла яҡшыларҙан булмай; төҙәтеүсе һәм секретарҙан башҡалары барыһы ла аҙ грамоталы һәм һәр саҡта ла айныҡ булмай, ошо хаҡта түбәндәгеләргә ҡарап һығымта эшләргә була. Ошондай бер нисә әфәнде, трактирҙа ныҡ ҡына эсеп алғас, барыһы бергә бер йортҡа кис ултырырға йыйылышҡан ҡыҙҙар менән күңел асырға барырға була, әммә йорт хужаһы, быларҙың ниндәй кешеләр икәнен белеп, эскә индермәй, ихата ҡапҡаһын ныҡ итеп бикләп ҡуя. Был өй ҡөлгә валынан йыраҡ булмай, ә унда артиллерия орудиеһы тора. Иҫерек чиновниктар орудиены валдан аҫҡа төшөрә, әлеге өй янына алып килеп, алға һәм артҡа табан тәгәрәтеп, ҡапҡаны төрттөрә, ҡапҡа ватылып, ергә ауғас, ошо иҫеректәр өйөрө өйгә килеп инеп, ундағы ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡотон ала.

Эссенға уның чиновниктарының ҡотороуы хаҡында хәбәр итәләр. Ул быларҙы үҙенә саҡыртып ала. Губернаторға барғанда уларҙың ҡайһы берҙәре, моғайын, үҙҙәрен таяҡ менән һуҡтырасаҡтары хаҡында әйткәс, бер татар кешеһе 100 тапҡыр таяҡ менән һуҡтырһалар ҙа бер ни ҙә булмаҫ, тик бынан да артығыраҡ яза бирмәһендәр, тип яуаплай. Ошо хаҡта миңә ошо кешеләр менән бергә ҡатнашып йөрөгән титуляр советник Василий Николаевич Астафьев һөйләгәйне, ул 50-се йылдар аҙағында вафат булды.

Ошо Астафьев губернатор канцелярияһында эшләгән сағында сик буйы бүлексәһен етәкләгән хәрби офицер Германға эш буйынса килгәс, теге бынан ниндәйҙер ҡағыҙ талап итә, ҡағыҙҙы бирмәгәс, ситтәрәк торған ҡылысын алып, Астафьевты сабып үлтерерү менән янай. Быныһы киң ихатаға йүгереп сығып китә, ә ярһыған Герман ҡындан һурылған ҡылысын тотоп, уның артынан ҡыуалап йөрөй. Бер аҙ ваҡыт үткәс, Герман арый һәм һөрөнөп йығыла. Ошоноң менән файҙаланып, Астафьев кире бүлмәгә инеп, ишекте келә менән бикләй һәм лакейҙан уның барины иртә менән килтерелгән ҡағыҙҙы ҡайҙа һалғанын һорай. Лакей ҡағыҙҙы табып бирә. Астафьев ишекте аса, һәм ул Германға әлеге ҡағыҙҙы биргәс, тегеһе уға ошолай тип әйтә: "Бәхетлеһең, әләкмәнең: ҡылысым менән һине сабып ташлаған булыр инем!"

Шул уҡ исправник Стәрлетамаҡ өйәҙендә хеҙмәт иткән сағында барыһына ла асыҡтан-асыҡ былай тип һөйләп йөрөгән: йылына 12 бот көмөш йыя алмаған исправник - бер эшлекһеҙ кеше ул.

Хәрби губернатор уға өйәҙ башҡорттарының дөйөм йыйынында кантон начальнигын һайлатырға ҡуша. Әлбиттә, һайланырға теләүселәр етерлек була. Өс кешене һайлауға сығаралар: Ибраһимов, Ҡайынов һәм Аҡсулпановты. Дәүләткилдиев, береһен дә үпкәләтмәй генә, һәр ҡайһыһынан 3-әр мең һум аҡса ала, һәр береһен мотлаҡ һайланасығына ышандырып, вәғәҙәләр бирә. Уның ҡул аҫтында хеҙмәт иткән земство чиндары 12 биҙрә пуншлы француз шарабын эсеп бөтөрә. Үҙ эшен тамамлағас, исправник кандидаттарға Ырымбурға барырға ҡуша, сөнки был мәсьәләне губернатор Эссен һәм уның чиновниктары ғына хәл итә ала. Ибраһимовты раҫлайҙар, ә ҡалғандарының аҡсаһы бушҡа китә. Дәүләткилдиев уларға, үҙегеҙҙе һәйбәт итеп күрһәтә алмағас, уңышҡа өлгәшә алмағанһығыҙ, ти, ә ысынында һайлау шарҙар һанына ҡарап хәл ителеүен был ябай кешеләр аңламай ине.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

16 февралдә дошмандың ике батальонға тиклем пехотаһы, 10 танкыһы, 8 "фердинанд" штурм орудиелары, 6 бронетранспортеры Пеплин районынан Браллентинға һөжүм башлай. Бында 16-сы гв. атлы дивизияһы менән бергә 15-се гв. Мозырь атлы дивизияһы оборона тота. Дошман авиацияһының 8 - 12 самолеттан торған төркөмдәре корпустың боевой позицияларын бомбаға тота һәм штурмлай. Браллентин янында 58-се гв. атлы полкының ике эскадроны һәм 148-се гв. артминполкының бер батареяһы һөжүм итеүсе дошман частарына ҡаршы тора. Немецтарҙың хәрби көстәре беҙҙең яугирҙарыбыҙҙыҡынан 5 тапҡырға артығыраҡ була. Атлы гвардиясыларға бында бигерәк тә ауыр була. Әммә улар артҡа сигенмәй, һис бер ҡурҡыу белмәй, ҡаһармандарса алыша.

Поляк ғәскәренең 1-се армияһы һәм 3-сө удар армия, 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре менән бергә хәрәкәт итеп, дошманды төньяҡ йүнәлештә сигенергә мәжбүр итер өсөн ярҙамсы һөжүм операцияһы уҙғара. Операция барышында планға бер ни тиклем үҙгәрештәр индерелә: 61-се армия, 7-се кавкорпусы һәм 2-се гвардия танк армияһы алдында төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш йүнәлешендә Каммин и Голлновҡа табан һөжүм итеү бурысы ҡуйыла. 47-се армия 1-се механизацияланған корпус менән Альтдамға һөжүм итә.

Яңы хәрби бойороҡ алғас, 7-се гвардия кавкорпусы тәүҙә 300 саҡрымлыҡ маршҡа сыға һәм Реетц ҡалаһынан төньяҡ-көнбайыштараҡ бер урманда туплана. Частар тик төндәрен генә хәрәкәт итә, көндөҙ урманда йә иһә тораҡ пункттарҙа, ҙур юлдарҙан ситтә урынлаша. Артиллерия, машиналар, йөк арбалары, аттар маскировкалана, радиобәйләнеш тотоу тыйыла. Бойороҡтар һәм ҡарарҙар штаб һәм бәйләнеш офицерҙары тарафынан телдән генә тапшырыла. Аҙыҡ-түлек һәм фураж менән тәьмин итеү ҙә алдан, тик төндәрен генә башҡарыла.

1945 йылдың 10 февралендә 16-сы гв. атлы дивизияһына төньяҡ-көнсығыш йүнәлешендә, дошмандың ҡамауҙа ҡалған төркөмө Штаргард и Штеттинға сигенә алмаһын өсөн, Ростенберг, Гутсдорф, Гезен һәм Верделгә табан һөжүм итергә бойорола. 16-сы гв. атлы дивизияһынан һулда 14-се гв. атлы дивизияһы, уңдан - 61-се армияның 9-сы уҡсы корпусы хәрәкәт итә (12 февралдән 7-се гв. атлы корпусы 61-се армияға оператив буйһондорола). Төньяҡтан Меркиш һәм Фридландҡа табан Поляк ғәскәренең 1-се армияһы һөжүм башлай.

Шул көндә 16-сы гв. атлы дивизияһына уға тиклем ремонтта булған 32-се танк полкы ҡайта. Танкистарға Гутсдорф тораҡ пунктын алыу бурысы ҡуйыла. Иң алда өлкән лейтенант И.И. Беляевтың танк ротаһы бара. Ул, ҡурҡыу белмәйенсә, Драге йылғаһын үҙенең танкыһында кисеп сыға, полктың уның артынан ҡуҙғалған барса экипаждары ла ҡаршы яр буйын биләй. 62-се гв. атлы полкы беренсе булып ошо йылғаны кисеп сыға, ә 148-се гв. артминполкы батареялары, Драге йылғаһын кисеп сығыу менән, дошман позицияларын көслө утҡа тота.

Эскадрондар атакаға ташлана, улар Гутсдорф һәм Гутедорфермюле тораҡ пункттарын ала. Был алышта немецтарҙың 2 миномет батареяһы, 12 пулеметы, 6 танкҡа ҡаршы пушкаһы юҡ ителә. Беҙҙең танкистар айырыуса ҡыйыу алыша. Взвод командиры, лейтенант В. В. Тарабаев, мәргәндәрсә атып, дошмандың 3 танкҡа ҡаршы ата торған пушкаһын емертә һәм Гутсдорфҡа бәреп инә. Танк роталары командирҙары И. И. Беляев, П. И. Криковлюк, взвод командирҙары, лейтенант В. Салыпанский һәм кесе лейтенант К. К. Захаровтар тәүәккәл эш итә, уларҙың танкистары, немец позицияларын утҡа тотоп, тапап-иҙеп үтә. Был офицерҙар Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Әйберҙе исрафламаҫҡа тырышыу хәйерсе психологияһы түгел - ул үҙеңдең һанаулы ғына ғүмереңә ихтирам, сөнки беҙ шул әйберҙәрҙе аҡсаға алабыҙ, ә аҡса эшләйбеҙ тип үҙебеҙҙең ғүмеребеҙ менән түләйбеҙ.*



# ОЖМАХТА ЙӘШӘГӘНЕҢДЕ

**Уйҙар сөңгөләнә уйылдырыр, һиҫкәндерер, һеңгеҙәтер әҫәрҙәр ижад итә Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА. Әҙибәнең "Кешеләр йондоҙҙар һымаҡ" тигән китабы Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде. Ошо уңайҙан уның менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Гөлсирә апай, беҙҙең алда, ошо халыҡтың улы-ҡыҙы булараҡ, кемдәрҙеңдер балаһы, ата-әсәһе булараҡ, кемдәрҙеңдер ҡартатай-өләсәһе булараҡ, кемдәрҙеңдер туғаны, дуҫы, яҡташы, ауылдашы булараҡ, кемдеңдер һөйгәне булараҡ, кемдеңдер серҙәше булараҡ, тағы ла әллә кемдең әллә кеме булараҡ, бихисап бурыстар тора. Барлыҡ бурыстарығыҙ араһында ижад нисәнсе урынды алып тора? Ғөмүмән, ул һеҙҙең бурысығыҙмы? Бурысығыҙ булмаһа, нимә ул?**

- Бик күп йылдар бер етәксем, нимәгәлер йәне көйөпмө, маҡтарға теләпме, аптырапмы: "Һин үҙең торғаны бер әҙәбиәт бит ул!" - тигәйне. Хәҙер уйлайым да: "Ә бит ул дөрөҫ әйткән", - тип ҡуям. Был ижади халәтте бәләкәйҙән йотлоғоп китап уҡыуым башлап ебәргәнме, әллә ошо булмышым арҡаһында китапҡа мөкиббәнменме, әйтеүе мөмкин түгел. Ә ижад ул эстә туҡтауһыҙ бара, эске диалог, монолог рәүешендәме, ә ҡайһы ваҡыт кинофильм кеүек. Сөнки ижад - ул эске ихтыяж, һәр кемгә хас ихтыяж. Был яҙыусыларға, артистарға, рәссамдарға ғына ҡағылмай, ғөмүмән, һөнәрен үҙенең эске талабы буйынса һайлаған һәр бер кешегә ҡағыла. Мәҫәлән, хирургтарға операция урынын матур итеп тегеп ҡуя белеү ҙә мөһим һәм минең бер танышым үҙенең өләсәһе эргәһенә ултырып, сәғәттәр буйы мауығып, унан әйбер ямарға өйрәнеүе тураһында һөйләгәйне. Шуның һымаҡ, беҙ бер ваҡытта ла ижад итеүҙән туҡтамайбыҙ, кеше менән һөйләшкәндә, берәй ҡыҙыҡлы деталь, әңгәмә, ваҡиға, сәйер холоҡҡылыҡ иғтибарҙы йәлеп итә, хәтергә һеңә лә, кәрәк кенә ваҡытында уйламағанда килеп сыға. Ижадҡа ошолай ҡарағанда, эске эш һәр ваҡыт бара. Шунан ниндәйҙер бер мәлдә миңә теге-йәки был әҫәрҙең сюжеты кинофильм һымаҡ килә башлай. Сағыу, матур, мауыҡтырғыс фильм. Бына шул ваҡытта ундағы күргән картиналарҙы һүҙ менән яҙып алырға маташыу - ижадтың иң ҡатмарлы мәле. Күргәндәрең шундай сағыу, ә һинең һөйләп биреүең шундай зәғиф. Был, моғайын, һәр ижадсыға хас халәт, хәтерләйһегеҙме Салауаттың шиғыры:

"Мин, бахыр, һине, Зөләйха, нык һөйәм.

Әйтә алмайса һүҙҙәремде, баш эйәм.

Һиңә дан йырлар өсөн телем зәғиф,

Һөйөүемде әйтергә һүҙем зәғиф".

Быңдай мәлдә йыш ҡына йәнем көйөп, килеп сыҡманы, тип ташлап ҡуям. Шунан ул яҙмаларҙы байтаҡ ваҡыттан һуң алып ҡарап, "Ярайһы ғына булған икән", тип эшкәртә, яҙа, шымарта башлайым. Ә һуңғы йылдарҙа, ғөмүмән, йыш ҡына ялҡауланам, рәхәтләнеп ул киноны үҙем генә ҡарарға һалышып киттем. Ижад минең өсөн - шул.

**Ябай ғына сағыштырыу. Яҙыусы, әйтәйек, биш йыл эсендә, пенсияһын һуҙып-тартып йәшәп, роман ижад итте икән ти. Уны китап итеп баҫтырып сығарыуға тағы ла биш йыл үтеп, йәмғеһе уның ун йыллыҡ интеллектуаль хеҙмәте, әйтәйек, 100 мең һумлыҡ гонорар менән баһаланды икән ти. Шул уҡ ваҡытта, үҙ ғүмерендә бер китап та уҡымаған, әммә йылан аяғын киҫкән сауҙагәр был аҡсаны бер көндә эшләп таба. Ниңә беҙҙең илдә интеллектуалдың ун йыллыҡ хеҙмәте интеллекты нуль кимәлендә булғандың бер көнлөк хеҙмәтенә тиң икән? Ошоларҙы белгәндән һуң нисек ижад итеп йәшәмәк кәрәк?**

- Ижад бер ваҡытта ла яҙыусының тамағын туйҙырмаған бит. Рус әҙәбиәтенә генә ҡараһаҡ та: Толстой - граф, Чехов - врач, бахыр Достоевский ҙа ғүмере буйы аҡсаһыҙ йонсоған, ә Тургенев - ҡасан ҡарама помещица әсәһенең һыҡмырлығына зарлана. Шул уҡ Бунин, Булгаков, Набоков...

Әҙәби ижад менән тамағын туйҙыра алғандар бик һирәктер, тип уйлайым.

Ә әле иноагент булған Улицкая, Акунин, Сорокин һымаҡтар - улар бөтөнләй икенсе мәсьәлә. Улар электән дә агент булған һәм шул емергес эштәре өсөн мул алған. Беҙ ул юлдан бара алмайбыҙ һәм кәрәкмәй ҙә.

Шуға күрә беҙҙең һөнәрҙәр: журналист - яҙыусы, тәржемәсе - яҙыусы иң ҡулайы, тип уйлайым. Хәйер, дөрөҫөн генә әйткәндә, башҡорт яҙыусылары барыбыҙ ҙа - беҙ үҙешмәкәрҙәр бит инде. Йоҡо иҫәбенә, буш ваҡытта ижад итәбеҙ...

**Һин ҡала тормошоноң барлыҡ уңайлыҡтарын татығандан һуң кире тыуған ауылыңа ҡайтып йәшәйһең, ижад итәһең. Ауыл бит беҙ идеаллаштырған ауылдан хәҙер күпкә ҡайтыш, романтикаһы ла йәш ваҡыттағыса түгел. Ҡыҫҡаһы, ауылға ҡайтыуың үҙмаҡсат инеме, әллә беҙ аңлап бөтмәгән серҙәре лә бармы? Әллә ауылдың асылға яҡыныраҡ булыуы ылыҡтырамы?**

- Ауылға мин Африкалағы хәйерселекте күреп, ҡотом осҡандан һуң: "Тиҙ арала Рәсәйҙе ҡотҡара һалырға кәрәк", - тигән ялҡынлы идея менән ҡайттым. Йәнәһе, ауылды күтәрәм. Хәҙер ул ваҡыттағы үҙемде хәтерләп, рәхәтләнеп көлөрлөк хәлгә килдем, ниһайәт. Тик бер нәмә лә юҡҡа түгел, пекарня асып-ябып ҡыялған бер нисә йыл эсендә ауылда йәшәгем килгәнен, дөрөҫөрәге, ҡалала бөтөнләй йәшәй алмаясағымды аңланым. Ауылда бит хәҙер ҡалалағыға ҡарағанда ла яҡшыраҡ уңайлыҡтар булдырырға мөмкин. Канализация, газ, һыу - шуларға өҫтәп, саф һауа, таҙа һыу, иҫ киткес матур тәбиғәт, үҙең үҫтергән саф, тәмле йәшелсә-емеш, ит, һөт. Ҡала һөнәр, белем алыу, йәш саҡта үҙеңде тормошҡа ашырыу маҡсатында мөмкинлек өсөн генә кәрәк. Минең өсөн хәҙер донъяның үҙәге - үҙем йәшәгән урын. Интернет бар икән - бөтә кәрәк мәғлүмәтте ауылда ла алам. Ауылда мин күберәк уҡыйым, сөнки кәрәкмәгән аралашыуҙарға, юлға, магазиндарға ваҡытымды әрәм итмәйем.

*Ауылға мин Африкалағы хәйерселекте күреп, ҡотом осҡандан һуң: "Тиҙ арала Рәсәйҙе ҡотҡара һалырға кәрәк", - тигән ялҡынлы идея менән ҡайттым. Йәнәһе, ауылды күтәрәм. Хәҙер ул ваҡыттағы үҙемде хәтерләп, рәхәтләнеп көлөрлөк хәлгә килдем, ниһайәт. Тик бер нәмә лә юҡҡа түгел, пекарня асып-ябып ҡыялған бер нисә йыл эсендә ауылда йәшәгем килгәнен, дөрөҫөрәге, ҡалала бөтөнләй йәшәй алмаясағымды аңланым. Ауылда бит хәҙер ҡалалағыға ҡарағанда ла яҡшыраҡ уңайлыҡтар булдырырға мөмкин. Канализация, газ, һыу - шуларға өҫтәп, саф һауа, таҙа һыу, иҫ киткес матур тәбиғәт, үҙең үҫтергән саф, тәмле йәшелсә-емеш, ит, һөт.*

Яңыраҡ, аҙна тирәһе ҡалала булырға тура килгәндә, тағы үҙем өсөн мөһим булған бер нәмәне аңланым: ҡалала ауылдағы һымаҡ тормош тантанаһы юҡ, ә был минең өсөн бик мөһим: иртән тороп сығыу менән тормош океанына сумаһың - мал-тыуар, ҡошҡорт, күбәләктәр, бал ҡорттары, ҡуңыҙҙар һәм башҡа миллионлаған йән эйәләре гөж килеп тора, ә үләндәр, сәскәләр, ағастар... Уларҙың кинәнесен, ләззәтен тойоу - әйтеп-аңлатып биргеһеҙ рәхәтлек бирә. Донъя менән гармония - күңел өсөн иң мөһиме шул, ахыры. Быны мин ғүмер буйы, ваҡыт-ваҡыт бер сәбәпһеҙ депрессияға төшөп китеүҙән йонсоған кеше булараҡ әйтәм.

Ауылда минең өсөн ылыҡтырғыс тағы бер нәмә бар - ул физик эш, хәрәкәттә - бәрәкәт. Ысын мәғәнәһендә ауыл балаһымын: саф һауа еҫкәр өсөн генә урамда эшһеҙ йөрөү - миңә элек тә енәйәт һымаҡ тойола торғайны.

## Беләм, ул ожмахты

Ауылдың тағы бер йән тыныслығы бирә торған яғы бар - унда бер нәмә лә әрәмгә китмәй: картуф ҡабығы һымаҡ нәмәләр малға, ҡағыҙ-мағыҙ - утҡа яғырға, моданан сыҡҡан кейем-һалым - мал араһына кейергә, ахыр сиктә, балаҫ һуғырға... Әйберҙе исрафламаҫҡа тырышыу хәйерсе психологияһы түгел - ул планетаға, хеҙмәт кешеһенә, үҙеңдең һанаулы ғына ғүмереңә ихтирам, ҡәҙер, сөнки беҙ шул әйберҙәрҙе аҡсаға алабыҙ, ә аҡса эшләйбеҙ тип үҙебеҙҙең ғүмеребеҙ менән түләйбеҙ.

**Наил Ғәйетбаев бер мәл бик ҡыҙыҡлы фекер әйткәйне: бәхет тураһында яҙып булмай. Ысынлап та, бәхетле тормош проблемаларҙы юҡҡа сығара һәм ундай тормоштоң ҡыҙығы ҡалмаған һымаҡ. Мин "Бәйләнештә" селтәрендәге диуарыма бәхет хаҡында шундай статус та яҙып ҡуйҙым: "Абсолют бәхет булмай. Сөнки бәхет ҡошон ҡулына эләктергән кеше уны юғалтмаҫ өсөн бәхетһеҙ борсолоуҙар кисереп йәшәй". Һиненсә, бәхет нимә ул?**

- Миненсә, бәхет - ул ниндәйҙер бер күтәренке рухи халәт, татлы тойғолар. Мәҫәлән, "Иң бәхетле минуттарың ниндәй?" тип һорағанда мин һәр ваҡыт тәүҙә ҡыҙым, унан улым тыуған иртәләрҙе иҫемә төшөрәм. Хәтеремдә, бала табыу йортоноң тәҙрәһе янында баҫып торам һәм шундай күтәренкелек тоям: теләһәм хатта кәйелеп-кәйелеп оса ла алырмын һымаҡ. Тик осоп китергә теләмәйем генә, сөнки эргәмдә сабыйым бар. Йәки, Мостай Кәрим фондының премияһын алғанда ла шундайыраҡ тойғо кисерҙем. Мин ул премияның Мәрйәм апай Бураҡаеваға биреләсәген белә һәм уның лайыҡ икәнен таный, уның өсөн ҡыуана инем. Бына уға премия тапшырҙылар, шаулап ҡул саптыҡ һәм кисәне алып барыусы "Яратам тип әйтеп өлгөрмәнем" хикәйәһе өсөн, тип иғлан итә башланы. Был минең өсөн шул тиклем көтөлмәгән һәм көтөлмәгәне менән айырыуса тәьҫирле булды: мең кешелек залда тағы ла халыҡ дәррәү ҡул саба - сәхнәгә нисек итеп сыҡҡанымды ла тойманым. Шул уҡ осош тойғоһо! Ошондай осошта һәр ваҡыт йәшәп булмай, миненсә, ул энергияны күп ала, ә беҙ атлап йөрөр өсөн яратылғанбыҙ. Шуға күрә ғалимдар, беҙҙең организм өсөн бәхетле булыуыбыҙ бик үк кәрәк түгел, сөнки бәхет хәлендә энергия күп китә, тиҙәр бит.

Бына мин ҡаҙаҡ эстрадаһын яратам, Димаш Хоҙайбиргәновтың "Дайдидау", "Ҡарағым-ау" тигән йырҙарын йәнем сығырҙай булып тыңлайым. Әммә бер тыңлау бер нисә айға етә - гел генә ундай хәлдә йәшәү мөмкин түгел. Эш күп ваҡыттарҙа еңел, дәртле, ябай әйберҙәрҙе тыңлаһаң, эшең дә ырай, арытмай ҙа.

Тормошто йәмләгән, ялҡын һымаҡ өтмәй, тандыр ғына йылытҡан бер рәхәт тойғо бар: ул ҡәнәғәтлек. Мәҫәлән, кешегә яҡшылыҡ эшләгәндән һуң шундай күңел күтәренкелеге була. Йәки бик күп ауыл кешеләренә хас нәмә: балалар ҡайтты, байтаҡ нәмә эшләп, ярҙам итеп, кире китергә йыйыналар, машиналарына ит, һөт, картуф, ҡыяр-помидор тултыралар. Әҙерләнгәндә ҡамасауламайым, тип, шул уҡ ваҡытта теләһә ниндәй һорауға яуап бирергә әҙер булып, ситтәрәк эскәмйәлә ултырам, ниндәйҙер бер мәлдә абайлайым: булмышымда күңел байрамы - ҡәнәғәтлек.

✓ ***Маргарет Тетчер: "Донъя йәмғәтселегe баһаһы буйынса Рәсәй территорияһында 15 миллион ғына кеше йәшәһә етә", - тип әйткәйне. Яза сығарылған һәм уны тормошҡа ашырыуҙан баш тартҡандар тиһегеҙме?***



# БЕЛӘҺЕҢМЕ?

## үҙем булдырам бит!

Был тойғоноң тағы бер әһәмиәтле яғы бар - үҙең биргәндә, үҙең башҡаларға нисектер ярҙам иткәндә барлыҡҡа килә, тимәк, ул һинең үҙеңә генә бәйләнгән, уны кисереү өсөн башҡаларҙан һәм яҙмыштан нимәлер көтөп торорға кәрәкмәй. Кешеләргә, йәмғиәткә кәрәкле кеше бул да, ҡәнәғәтлеккә кинәнеп тик йөрө... Шәп бит!

▸ **Һәр яҙыусы әҫәрендә үҙен яҙа тиҙәр. Ҡайһы әҫәреңдәге ҡайһы геройыңды туранан-тура үҙеңдең сағылышың тип әйтә алаһың? Кемдәргә "Яратам" тип әйтеп өлгөрмәнең?**

- Һорауыңды уҡыным да, үҙемдең геройҙарымды барлап алдым. Үҙемде үк яҙмайымдыр, ә, бәлки, үҙемдең хыялымдағы фаразымдың ҡайһы бер сифаттары инеп китәлер. Ә былай, йә нык тетрәткән, йә нык аптыратҡан, йә нык һоҡландырған саҡта яҙаһыңдыр. Йыш ҡына ниндәйҙер эске проблемаларымды хәл итер өсөн яҙам, ахыры, сөнки әҫәр ҡайҙандыр, төпкөл аңдан килә бит. Әлбиттә, әҫәрҙә булмышыңды бер нисек тә йәшереп булмай. Элек мин "Донъя алдына шыр яланғас күңел менән сығып баҫалар" тип, шәкирҙарҙы нык йәлләй торғайным. Бер ваҡыт йәштәр ижады буйынса семинарҙа ҡатнаштым. Бер нисә башлап яҙыусының әҫәрҙәрен тикшерҙек. Семинарға әҙерләнгәндә үк яҙғандарын уҡып, ул яҙыусыларҙы күҙ алдына килтергәйнем инде. Үҙҙәре менән аралашҡас, хайран ҡалдым: проза автор тулыһынса, бөтөнләй тиреһеҙ, бөтөн эсәк-ҡарыны менән асыла икән!

Сөнки һин, теләйһеңме-теләмәйһеңме, геройыңды үҙеңдең донъяңа урынлаштыраһың, уны үҙеңдән сығып баһалайһың, үҙең тойғанса һүрәтләйһең.

Ә яратыуҙы белдереүгә килгәндә, мин тормошто яратыуым, ни өсөн һәм ҡайһылай яратыуым, уның ниндәй яратыуға лайыҡ булғаны тураһында яҙып еткермәгәнмен. Яҡын арала ныҡлап шуға тотонорға торам. Әҫәремдең инде әллә нисә йыл күңелдә йөрөгән "Йәнтөйәк һәм донъя араһында" тигән исеме лә бар.

▸ **Лютер Бербанк тигән Америка селекционеры малдарҙың продуктлылығын арттырыу өсөн энәһеҙ кактустар үҫтереүгә өлгәшә. Кактустарҙы бигерәк тә һыйырҙар яратып ашай, әммә энәләре ҡамасаулаған була. Тәүҙә һәр төрлө ысулдарҙы ҡулланғандан һуң, тәжрибәһе килеп сыҡмағас, кактустарға һөйөү һүҙҙәре әйтә башлай һәм маҡсатына өлгәшә, үҫентеләрҙең энәләре юҡҡа сыға. Ул йылдарҙа Америкала ауыл хужалығы продуктлылығы бермә-бер күтәрелә. Ошо тәжрибәнән сығып, хәҙерге көндә донъяла, Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда барған хәлдәргә ҡарата ниндәй ишаралар таба алаһың? Әгәр ҙә кешеләр бер-береһенә һөйөү һүҙҙәре әйтһә, барлыҡ һуғыштар ҙа, ыҙғыштар ҙа туҡтар һымаҡ...**

- Бахыр кактустарҙың үҙгәреүенә ышанам, кешеләргә, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, ышанып етмәйем. Эш бында оптимизм менән пессимизмда ла түгел. Әҙәм балаһы күпкә ҡапма-ҡаршылыҡлыраҡ. Тормошта йыш ҡына яратыуың - бахырлыҡ, яҡшылығың - алйотлоҡ, иплелегең - йомшаҡлыҡ һымаҡ ҡабул ителә. Кешеләр "крутой"ҙарҙы нығыраҡ ихтирам итеүсән. Быны ла үҙ елкәмдә татығаным бар. Яҡшылыҡтың ысын баһаһын аңлар өсөн тормош тарафынан байтаҡ дөмбәҫләнергә һәм шул уҡ ваҡытта күңелгә асыу йыймаҫҡа кәрәк. Быны мин үҙемдән дә күрәм: яуызлыҡ, алама һүҙ, йәмһеҙ ҡыланыш хәҙер мине бик аптыратып бармай, ә кешенең бәләкәй генә яҡшылығынан да илайым. Хәйер, был тормоштоң аңлап бөтөп булмаған сере - ахыр сиктә бахырлыҡ булып ҡабул ителгән һөйөү барыбер нисектер өҫтөнлөк ала, еңеп сыға. Был аңлап булмай торған мөғжизәне донъяның ысынлап та Аллаһы Тәғәлә тарафынан яратып яратылыуына дәлил һымаҡ ҡабул итәм.

Әммә кешелек тарихының гел ҡан ҡойошло үҙ-ара һуғыштарҙан торғанына ҡарағанда мин ихтирам иткән бер белгестең: "Берәй ваҡыт кешелек үҙ-ара һуғышыуҙан туҡтармы икән?" - тигән һорауға биргән яуабында ҡурҡыныс хаҡлыҡ бар: "Әгәр ҙә был ҡасан да була ҡалһа, тимәк, кешелек тулыһынса һәләк булған буласаҡ", - тигәйне ул. "Мин һәм улар", "беҙ һәм улар" - ошондай ҡапма-ҡаршылыҡ бәрелешендә формалашҡан кешелек, ғәҙәттә, дөйөм хәүеф, дөйөм ҡурҡыныс алдында бергә уҡмаша. Ә әле беҙ, беҙҙең ил халҡы, йәмғиәт хатта өҫкә ябырылып килгән хәүеф алдында ла берләшергә ашыҡмайбыҙ. Бына шул минең өсөн әле иң аяныслыһы.

Мин йыш ҡына донъя тураһында уйлағанда ергә самолет иллюминаторынан ҡарап барғанымды иҫкә төшөрәм. Париждан Буркина-Фасоға алты сәғәт 40 минут осоҡ. Шунда хайран ҡалдым: кеше рәхәтләнеп эшкәртеп, ҡолас ташлап йәшәрлек киңлек юҡ кимәлендә. Ҡап-ҡара тауҙар һәм ус аяһындай йәшеллектә бил бөккән кешекәйҙәр. Унан - икһеҙ-сикһеҙ Сахара сүллеге. Бына шул ваҡытта үҙеңдең ни тиклем хозур илдә йәшәгәнеңде, урман-ҡырҙарҙың, йылға-күлдәрҙең муллығын аңлайһың һәм тыуған илгә бөтөнләй икенсе ҡараш уяна. Беҙ хазинаға эйәбеҙ, ә уға эйә булырға теләүселәрҙең арымай-талмай уны ҡулға төшөрөргә хыяллаңыуҙары ла аңлашыла. Был хаҡта Маргарет Тетчер 1991 йылда уҡ: "Донъя йәмғәтселеге баһаһы буйынса Рәсәй территорияһында 15 миллион ғына кеше йәшәһә етә", - тип әйткәйне. Яза сығарылған һәм уны тормошҡа ашырыуҙан баш тартҡандар тиһегеҙме?

Шуға күрә үҙ-ара ыҙғыштар ваҡытында мин иң элек, беҙҙең талаштан кемдәргә файҙа, тип уйлайым. Шул уҡ ваҡытта бергәлек, татыулыҡ ябай ғына ғәҙеллеккә таянғанда ғына мөмкин. Быны бер кемгә лә оноторға ярамай. Ғәҙеллек тойғоһо ул йән эйәһенең тәбиғәтенән, ул хатта йәнлектәргә лә хас, тимәк - был Аллаһы Тәғәләнән. Ғәҙәти генә татыулыҡ, берҙәмлек - ғәҙеллеккә нигеҙләнгән.

▸ **Иң төп әҫәрем тип ҡайһы әҫәреңде әйтә алаһың. Әллә ул яҙыламы? Әллә бармаҡтарыңдың ҡайһыһын тешләһәң дә, ауыртамы?**

- Мин, ғәҙәттә, теләк-хыялдарымдың артынан өлгөрә алмай йәшәйем. Шуға күрә ҡайһыһы төп, ҡайһыһы әһәмиәтле тип уйлағаным юҡ. Шуныһы бар: уҡыусыларым - башлыса ҡатын-ҡыҙҙар. Ир-аттар ҙа яратып уҡырлыҡ берәй нәмә яҙырға ине, тигән уй ваҡыт-ваҡыт башҡа инеп сыға...

▸ **Яһалма интеллект барлыҡҡа килтереү кешеләрҙе роботҡа әйләндереүҙең бер аҙымы тип уйламайһыңмы? Минеңсә, ундай интеллект тойғоларҙы ҡыҫырыҡлап сығарыр һымаҡ һәм беҙҙең һымаҡ хисле халыҡҡа был һәләкәт менән янауы бар. Шулай түгелме?**

- Яһалма интеллект - ул инструмент, ҡорамал тиҙәр уны уйлап табыусы һәм камиллаштырыу өҫтөндә эшләүселәр. Беҙ бит компьютерҙа эшләргә өйрәндек һәм уны кем ни тиклем һәйбәтерәк өйрәнде, эше шул тиклем үк еңелләште. Шуның һымаҡ, яһалма интеллект та тормошобоҙҙа үҙ урынын таба башланы бит: мәҫәлән, күптәрҙең робот-саң һурҙырғыс, робот тәҙрә таҙартҡыс бар. Бында мине икенсе нәмә борсой: уны үҙләштереүҙә артта ҡалмаҫҡа тырышырға кәрәк. Был процесты туҡтатыу мөмкин түгел, тимәк, "әгәр ҙә туҡтата алмайһың икән, башлап бар", тиҙәр бит. Шуға күрә үҙебеҙҙең Рәсәй ғалимдарының эштәрен ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам.

Мәҫәлән, Ольга Ускованы "Рәсәй роботтарының әсәһе", тиҙәр, үҙенең корпорацияһы бар, был йәһәттән бик уңышлы эшләйҙәр. Үҙҙәре эшләгән Ипполит тигән яһалма интеллект менән бергә яҙған китабы бар. Уны уҡыһаң, ҡурҡып китәһең: донъяла шаҡ ҡатырғыс технологик революция бара, кешелектең бер өлөшө шунда йәшәй, киләсәкте ана шул ҡаҙаныштар күҙлегенән баһалай, пландар ҡора һәм был пландарҙа - беҙҙең яҙмышыбыҙ. Ә беҙ - күпселек - бер нәмә лә белмәй-күрмәй, маймылдар ҙа түгел хатта, ә динозаврҙар һымаҡ үҙ-ара һуғышып, көрмәкләшеп, донъяның инде бөтөнләй башҡа икәнен абайламай ҙа йәшәйбеҙ. Трансгуманистарҙың хыялдары буйынса, беҙ ана шул ҡасандыр Хаксли һүрәтләгән "хайран иткес яңы донъяла", виртуаль донъяла барыһын да онотоп, тик компьютерҙа уйнап, минимум ихтыяжға риза булып көн итергә тейешбеҙ икән, беҙ әле үк рәхәтләнеп шул донъяға инеп бармайбыҙмы ни: тәүлектең нисә сәғәтен гаджеттарҙы ҡулдан төшөрмәй үткәрәбеҙ?

Бына мин, өлкән кеше, ауылда йәшәйем, социаль селтәрҙәрҙә аңлы рәүештә ҡатнашмайым, чаттарҙа юҡмын, "Тик-ток" ҡарамайым. Эшем телефон менән бәйләнмәгән, ун йылға яҡын өйөмдә телевизорым юҡ. Ә үҙемде контролдә тотор өсөн бик нык тырышырға тура килә, хәҙер, бер генә нимә ҡарайым да, тип, үҙеңде алдайһың да, ҡараһаң, күҙ асып йомғансы бер-ике сәғәтең үтеп киткән! Миллиардлаған кешенең "Тик-ток"та теләһә нәмә ҡарап, берәүҙең иҫәрлегенә хахылдап, һанаулы ғына ғүмер сәғәттәрен юҡҡа сарыф иткәнен уйлаһаң, сәстәр үрә торорлоҡ.

(Дауамы 10-сы биттә).



***Тормошта йыш ҡына яратыуың - бахырлыҡ, яҡшылығың - алйотлоҡ, иплелегең - йомшаҡлыҡ һымаҡ ҡабул ителә. Кешеләр "крутой"ҙарҙы нығыраҡ ихтирам итеүсән. Быны ла үҙ елкәмдә татығаным бар. Яҡшылыҡтың ысын баһаһын аңлар өсөн тормош тарафынан байтаҡ дөмбәҫләнергә һәм шул уҡ ваҡытта күңелгә асыу йыймаҫҡа кәрәк. Быны мин үҙемдән дә күрәм: яуызлыҡ, алама һүҙ, йәмһеҙ ҡыланыш хәҙер мине бик аптыратып бармай, ә кешенең бәләкәй генә яҡшылығынан да илайым. Хәйер, был тормоштоң аңлап бөтөп булмаған сере - ахыр сиктә бахырлыҡ булып ҡабул ителгән һөйөү барыбер нисектер өҫтөнлөк ала, еңеп сыға. Был аңлап булмай торған мөғжизәне донъяның ысынлап та Аллаһы Тәғәлә тарафынан яратып яратылыуына дәлил һымаҡ ҡабул итәм.***

***✓ Яһалма интеллект та тормошобоҙҙа үҙ урынын таба башланы бит: мәҫәлән, күптәрҙең робот-саң һурҙырғыс, робот тәҙрә таҙартҡыс бар. Бында мине икенсе нәмә борсой: уны үҙләштереүҙә артта ҡалмаҫҡа тырышырға кәрәк.***

# ОЖМАХТА ЙӘШӘГӘНЕҢДЕ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

## Беләм, ул ожмахты үҙем булдырам бит!

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Ә балалар тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Шуға күрә был технология революцияһынан әҙәмлекте һаҡлап килеп сығыу өсөн һәр кешегә уяулыҡ, сослоҡ, тәнҡитле фекер йөрөтөү ҡеүәһе һымаҡ ихтыяр көсө талап киткән сифаттар кәрәк инде. Ә беҙ, әҙәм балалары, йыш ҡына осраҡта, ауырлыҡҡа түгел, рәхәткә сыҙамайбыҙ. Донъя кимәлендә геосәйәсәттә лә, технологияла ла баш китерлек һынылыш бара, МХО ана шуның ҡан ҡойошло, утлы өлөшө. Әммә кешеләрҙе айырым ғына ҡотон алып, өйҙәргә бикләп тә бик уңышлы кәметеп булғанын ковид ваҡытында күрҙек бит инде.

Хәйер, былар барыһы ла - тормош. Боронғолар әйтмешләй: "Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән ҡалып булмай инде". Тик йәшәгән генә ваҡытыбыҙҙың ҡәҙерен беләбеҙме икән? Еңел дофамин артынан ҡыуып, телефон артында ултырмай, ысын тормошта йәшәһәк, яһалма интеллект беҙгә тормошобоҙҙо еңеләйткән, емешлерәк иткән ярҙамсы ғына булыр ине, тигән ышанысым ҙур.

**‣ Яңынан ғүмереңде йәшәргә тура килһә, ҡайһы урындағы ниндәй хаталарыңды төҙәтер инең?**

- Йәш ваҡытта хәҙерге тәжрибәм булһа, мөхәббәт тураһында хыялланыуға, уны көтөп һағышланыуға ваҡытымды сарыф итеп тормаҫ инем. Тәҡдиреңә яҙған ваҡиғалар, әһәмиәтле осрашыуҙар, иң кәрәкле кешеләр - барыһы ла көтмәгәндә килә. Булырға тейешле нәмә - була. Китергә тейешле кеше - китә. Тормош - ул бер оло вокзал кеүек, гөжләп торған пассажир залы, поездар килә тора, китә тора һәм һәр кемдең үҙенең маршруты, расписаниеһы.

Кешеләрҙең насарлығына үтә ҙур әһәмиәт биреп, баш ватып, ваҡыт әрәм итмәҫ инем. "Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер үк океандың тамсылары һәм һәр тамсыла тотош океандың сифаттары тупланған", - тигән метафора оҡшай миңә. Ысынлап та, бәндә балалары күп ҡырлы һәм "кеше түгел икән" тип күңел ҡайтҡан зат та бер көн килеп яҡшылығы менән аптыратып ҡуя.

Йәнә лә, бер һөйләшкәндә Мостай ағай: "Минең яҡшым, уның мотлаҡ башҡалар өсөн дә яҡшы булыуы ла мотлаҡ түгел. Ул минең яҡшым", - тигән фекер әйткәйне. Шуны йыш ҡына хәтерләйем. Ошо ябай ғына тойолған һүҙҙәр күп нәмәгә күҙемде асты, тынысландырҙы. Ҡайһы ваҡыт берәй кешене нығ оҡшатаһың. Уның менән дуҫлашҡың, аралашып йәшәгең килә. Ә ниңәлер бер нисек тә килеп сыҡмай. Хәҙер аңлайым: быға бер кем дә ғәйепле түгел, тимәк, мин ул кешенең яҡшыһы түгелмен. Йәки беҙ бер-беребеҙҙең яҡшыһы түгелдер, бары шул ғына. Ошоно аңлау бик күп үкенестәрҙән араланы, тормошомдо шаҡтай еңеләйткәйне.

Йәнә шуны аңланым: шәхси яуаплылыҡ һәм йоғонто яһау даирәһе тигән нәмәләр, реактив йәки проактив булыу кеүек нәмәләрҙе төшөнөү ғүмерҙең һанаулы ғына ваҡыттарын, үҙеңә бирелгән энергияны - мөмкинлекте, һаулыҡты исрафламай, һаҡсыл файҙаланыуға нығ ярҙам итә икән.

**‣ Һинең әҫәрҙәреңдә уҡыусылар көтөп ала. Алдағы йылдарҙа уларҙы ниндәй әҫәрҙәрең менән һөйөндөрөргә иҫәп тотаһың?**

- Һуңғы осорҙа мине йәмғиәтебеҙҙәге дәғүәләр, ҡараштар төрлөлөгө, төрлө сәйәси ҡараштарҙа булыу арҡаһында үҙ-ара дошманлыҡ, нәфрәт тойғоларының артыуы нығ ҡаҡшатты, ауырыу сигенә килтереп еткерҙе, донъяға, булып ятҡан ваҡиғаларға ҡапма-ҡаршы күҙлектән ҡарауыбыҙ арҡаһында бик күп яҡындарым менән аралар боҙолдо. Ә был минең өсөн әйтеп биргеһеҙ фажиғә кимәлендә, сөнки мин кешеләргә генә түгел, хатта бүтән йән эйәләренә лә нығ эҫенеп йәшәйем. Нығ ҡартайып киткән тәүге кәзәм Марта менән саҡ хушлашыуым, һаман һағыныуым тураһында әйтһәм, дуҫтар менән һыуынышыуымдың ни тиклем әсенешле икәнен аңларһың. Ниндәйҙер кимәлдә әле беҙҙең йәмғиәттә "һалҡын һуғыш", граждандар һуғышы аҫтан ғына көйрәй - йәғни илде, беҙҙе юҡ итергә ниәтләгән дошмандар алып барған мәғлүмәти һуғыш, тарихыбыҙға, халҡыбыҙға өйгән бысраҡлыҡтар, ялғандар үҙенең мәкерле эшен туҡтауһыҙ эшләй, үҙенең хәүефле емешен бирә.

Һәр кем хәҙер мәғлүмәтле, әммә мәғлүмәтте ул ниндәй инештән, ниндәй сығанаҡтан алған, уның нәҫел тарихын, ата-бабаларының ҡаҙаныштарын, ҡиммәтен юҡҡа сығарып, беҙҙең тамырҙарыбыҙҙы өҙгәнен ул тоямы?

Ваҡиғалар шул тиклем ҡатмарлы, етеҙ, информацион сүп-сар шул тиклем күп һәм мауыҡтырғыс - шуға күрә күптәр ваҡиғаларҙың асылын уйлап тормай, тормош буйлап ҡамғаҡ кеүек күңелле тәгәрләп бара бирә. Хәтер шул тиклем ҡыҫҡа - бына торған пандемия тураһында ла тиҙ генә онottoҡ: ул ниндәй маҡсатта ойошторолған икән? Ундай һорау күптәрҙең башына ла инеп сыҡмай хәҙер.

Был мәсьәләләр мине бик нығ борсой. Хатта үҙемә был һинең яуаплылыҡ даирәңә инмәй, тип тылҡырға маташһам да, минең балаларым, ейәндәрем бар - улар йәшәйәсәк киләсәктең нисек булырына битараф булып буламы? Мин яҡты донъяла байтаҡ йәшәйем - бик уҫал хәтерлемен, бик күп нәмәне элек аңламаһам, хәҙер уларҙың асылы башыма барып етә. Әммә күптәр менән ул турала һөйләшеү ҙә хатта мөмкин түгел: яңы ғына ихлас ләстит һатып торған әңгәмәсең шунда уҡ ябыла, күҙҙәре ҡайҙалыр эскә китә һәм хуш: ул үҙенең бункерына инеп бикләнде.

Эйе, беҙҙең һәр беребеҙ үҙенең информацион бункерында йәшәй һәм хәҙер һирәк-һаяҡ, саф һауа һуларға сыҡҡанда еңел-елпе хәбәрҙәр һөйләшеү өсөн генә аралашабыҙ.

Элек мин нимәләрҙер һөйләргә, үҙемдең ҡарашты аңлатырға маташа торғайным: файҙаһыҙ икәнде аңланым. Ни өсөн был хаҡта оҙаҡлап һөйләп тороуыңдың сәбәбе шул: сәнғәттең, әҙәбиәттең кеше күңеленә ниндәйҙер серле һуҡмаҡтары бар һәм әлегә ул һуҡмаҡтар томаланмаған. Ижадсыларға (игелеккә хеҙмәт иткән кешеләргә) шуның менән файҙаланып өлгөрөргә кәрәк. Дошмандар был хаҡта күптән белә, улар көнө-төнө ал-ял белмәй эшләй, ә нишләп мин эшләмәйем?

Эйе, кеше хәҙер мәғлүмәтле, сит илдәргә йөрөй, тик күптәр, анекдоттағыса, "туризм менән эмиграцияны бутай". Ҡайҙалыр донъяла, мәҫәлән, АҠШ-та ожмах һымаҡ тормош барҙыр, тип хыялланып йәшәй. Был эске эмиграция тип аталған күренеш ысын эмиграциянан да ҡурҡыныcыраҡ. Сөнки сығып киткән кеше ысынбарлыҡты күреп йә яраҡлаша, йә кире ҡайта ла тынысланып йәшәп алып китә. Ә тәүгеләр - тегендә лә китмәй, бында ла күңел һалып йәшәмәй, юҡ хыял менән тормошон бушҡа үткәрә.

Сит илдәрҙәге тормош тураһында һөйләһәң, күптәрҙең йәне көйөп, хатта дошман күреп киткәненә аптырай торғайным. Былтыр бер таксисҡа ултырып, Өфөгә барҙым. Урта йәштәрҙәге һөйкөмлө, алсаҡ кеше. Алты сәғәтлек юлда гел һөйләшеп барҙыҡ. Барған һайын кәйефе төшкәнен абайланым. Инде килеп еткәс, багажниктан сумкамды алып тотторҙо ла: "Эй, апай, минең хыялымды үлтерҙегеҙ. Мин, исмаһам, донъяның бер ерендә матур, ғәҙел тормош бар, тип ышана торғайным", - тине. Шунда башҡаларҙың да мөнәсәбәтен аңланым: хыялдарҙы емерәм икән.

Ошо хаҡта уйлағанда гел атайым менән әсәйем иҫкә төшә. Яралары уңалғас, атайым Үзбәкстандағы персик, виноградтары һығылып бешеп ултырған йортон һатып, үҙ илемдә үләм, тип, Иҙәшкә ҡайтҡан. Әсәйем менән буш урынға йорт һалып, баҡса ултыртып, йәнә утыҙ йыл йәшәне. Умартасы дуҫтары шау сәскәле ишек алдыбыҙға килеп инһә: "Һин үҙеңдең ожмахта йәшәгәнеңде беләһеңме?" - тип һорай торғайны. "Беләм, - тип яуаплар ине атайым. - Ул ожмахты үҙебеҙ булдырабыҙ бит".

Бына шул үҙ ҡулдарыбыҙ, үҙ көсөбөҙ, үҙ һөйөүебеҙ менән ожмах булдырыуыбыҙ тураһында күңелдәргә һеңдерерлек, йәшәү дәрте ҡуҙғытырлыҡ әҫәрҙәр яҙғым килә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

***Миллиардлаған кешенең "Тик-ток"та теләһә нәмә ҡарап, берәүҙең иҫәрлегенә хахылдап, һанаулы ғына ғүмер сәғәттәрен юҡҡа сарыф иткәнен уйлаһаң, сәстәр үрә торорлоҡ. Ә балалар тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Шуға күрә был технология революцияһынан әҙәмлекте һаҡлап килеп сығыу өсөн һәр кешегә уяулыҡ, сослоҡ, тәнҡитле фекер йөрөтөү ҡеүәһе һымаҡ ихтыяр көсө талап киткән сифаттар кәрәк инде. Ә беҙ, әҙәм балалары, йыш ҡына осраҡта, ауырлыҡҡа түгел, рәхәткә сыҙамайбыҙ. Донъя кимәлендә геосәйәсәттә лә, технологияла ла баш китерлек һынылыш бара, МХО ана шуның ҡан ҡойошло, утлы өлөшө. Әммә кешеләрҙе айырым ғына ҡотон алып, өйҙәргә бикләп тә бик уңышлы кәметеп булғанын ковид ваҡытында күрҙек бит инде.***

*ЯҢЫ КИТАП*

# ПРЕЗИДЕНТ ЭНЦИКЛОПЕДИЯҺЫ



**БР Фәндәр академияһында "Мортаза Рәхимов" энциклопедияһының исем туйы уҙҙы. Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовҡа арналған китап Рәсәйҙә дәүләт эшмәкәренә арналған тәүге персональ энциклопедиялар иҫәбенә ҡарай.**

Был энциклопедия Башҡортостандың Башлығы Радий Хәбиров указына ярашлы ҡыҫҡа ваҡыт - бер йыл эсендә төҙөлгән. Китаптың тәүге даналарын төбәк етәксеһе һәм Рәхимов командаһында оҙаҡ йылдар эшләгән кешеләр ҡулына алды. "Энциклопедияны, бигерәк тә күренекле дәүләт эшмәкәренә арналғанын, әҙерләү еңелдәрҙән булманы. Беҙ был эште яңы быуын рәсәйлеләр һәм Башҡортостан халҡы Мортаза Ғөбәйҙулла улы һәм уның командаһы эшләгән осор тураһында тулыһынса аңлаһын өсөн башҡа энциклопедия үҙәктәренең тәжрибәһенә ҡарап башҡарҙыҡ. Энциклопедияға яҡынса 550 мәҡәлә индерелде, шуның яртыһы - терминологик мәҡәләләр һәм яртыһы биографик. Әлбиттә, китапҡа республиканың яҙмышын хәл иткән һәм уның суверенлығын билдәләгән дәүләт норматив хоҡуҡ акттарын да индерҙек. Энциклопедияла шул осорҙан 600 фото ҡулланылды, быны өсөн 6 меңдән ашыу фотоһүрәтте ҡарап сығырға тура килде", - тине "Мортаза Рәхимов" энциклопедияһының баш мөхәррире, БР Фәндәр академияһы вице-президенты, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Александр Дегтярев.

✓ *Ғәйепләп әйтмәйем, ҡатын-ҡыҙҙың булмышын бик тырышһаң да үҙгәртеү мөмкин түгел, ғаиләле булһа ла, балалар үҫтерһә лә, ул һәр саҡ, хатта ҡартайғансы, күк атҡа атланған принцтың көтмәгәндә килеп инерен көтөп йәшәй.*



ХӘТЕРКИТАП

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ ҠЫРҠ СЫРАҒЫ

Күп тапҡырҙар яҙһам да, ҡабат-ҡабат ҡабатланған ерҙәре бер аҙ ҡайтышланһа ла, әйтер һүҙем Зәғифә инәй хаҡында. Ул беҙгә күрше булып, урам аша аласыҡтай ғына һалам ҡыйыҡлы өйөндә йәшәне. Бөгөн ҡалай ҡыйыҡлы, рәшәткә тәҙрәле, кирбестән һалынған, ян-тирәһе бейек ҡойма менән уратылған ике-өс ҡатлы коттедждар бермә-бер ишәйгән осорҙа, әллә нишләп, һаман да булһа, һалам ҡыйыҡлы, уҫаҡ бүрәнәләрҙән һалынған, аҡбалсыҡ менән аҡланған бикһеҙ ауыл өйҙәрен һағынам. Ишек тотҡалары алтынға мансылған бейек һарайҙар батшаларға тәғәйен, ә минең йәнемә иһә ана шул таныҡ аҡлыҡ, сафлыҡ етмәне һәм әлеге көндә лә етмәй. Тыумыштан һуҡыр ине инәй, сығышы менән Хәйбулла районы Урыҫбай ауылынан, тик беҙгә ниндәйерәк урау юлдар менән килеп эләккәндер, уныһын инде бер Хоҙай белә, һәр хәлдә, мин иҫ белгәндә ул беҙгә ҡырҡ ҡоршау быялалы тәҙрә өлгөләрен терәп, йүнәтеп ҡарап йәшәй ине инде. Һуҡырлығын иҫәпкә алмағанда, төҫкә-башҡа башҡа ауыл әбейҙәренән бер яғы менән дә айырылмағайны ул: тәбәнәк буй, йоҡа кәүҙә, таралып күренгән ап-аҡ сәстәр, йыйырсыҡтар менән сыбарланған ирәбе йөҙ. Миңә ҡалһа, уны Леонардо Да Винчиҙың донъяла киң билдәле Моно Лизаһына оҡшата инем. Әллә көн дә күреп йөрөп күҙ өйрәнеп киткәнгәме, әллә икенсе сәбәпме, Зәғифә инәй ете диңгеҙ арьяғындағы Лизаға ҡарағанда матурыраҡ та, һылыуыраҡ та, һөйкөмлөрәк тә ине шикелле. Бер ҡатлыраҡ ихлас ҡылыҡһырлауым арттырыу ҙа шаштырыу ҙа түгел.

Уның тәү ҡарашҡа сәйер иҫәпләнгән ике ғәҙәте ныҡ хәтерҙә ҡалған; көн яҡтыһын сырамытып күрмәһә (ошо килеш тә үҙен күҙлеләрҙән былайыраҡҡа иҫәпләне) лә, иртә таңдан, шунан ҡараңғы төшөп, төн уртаһы ауғансы өйөндә утын ҡабыҙа һәм иртә яҙҙан ҡара көҙ еткәнсе, ҡояш сығып байығанға ҡәҙәр, өйөнөң стеналарын һәрмәп, ҡуңалтаҡ өйөн зыр-түңәрәк уратып, әйлән-бәйлән әйләнгеләп йөрөй. Өйө уратаһы таҡырланып бөткән берләм һуҡмаҡ менән ҡайылғайны, балдаҡҡа алынғайны. Ҡарсыҡтың өйөндә ут тоҡаныуы була, әсәйем былай ти: "Ана, инәйең ҡара таңдан уянып, үҙенә ҡунаҡтар саҡыра ла башланы, тағы уның тәҙрәһендәге уттар урам юлын яҡшы яҡтырта, ҡараңғыла үткән-һүткәнгә абынмай үтеп китеү өсөн ҡулай!" Шул ҡылығы менән инәй башҡаларҙың барыр юлын яҡтыртып, ҡараңғыны ҡасырып йәшәне. Тағы шуны өҫтәп әйтмәксемен, Зәғифә инәй маңлай күҙе менән түгел, иң әүәл күңел күҙе менән күрҙе һәм ҡабул итте әйләнә-тирәһен. Күңел күҙе инде үҙ сиратында маңлай соҡорҙарына батҡандарға ҡарағанда үткерерәк тә, төпкөлөрәк тә, хислерәк тә.

Уны тотош ауыл халҡы ҡараны, ауырһынмайынса теләп ҡараны, унан ҡалһа, аҙна һайын мәктәптән эт өйөрөләй тимур командаһы килә. Ир-ат ҡырҙан утын килтереп бысып-ярып, өйҙө йыл әйләнәһенә йылы тотһа, кәрәккәндә йортто, таҡта соландсаны, инер-сығыр тупһа тирәһен һипләһә, ҡатын-ҡыҙ иһә кейем-һалым, түшәнер-яҫтаныр, ҡабым ризыҡ хәстәрләне, ҡайғыртты, иҙәнгә ҡый-һай, тәҙрә төбөнә, түшәмгә саң ҡундырманы. Кеше - кешене яратмағанда, мөрхәтһенмәгәндә, күңелдәре тарыҡҡанда, көнитмештең аҫты-өҫкә килеп боларғанда, Зәғифә инәй ише артыҡтар, кеше көнлөләр бөгөн йәшәй алмаҫтар ине, билләһи, йәшәй алмаҫтар ине. Булмаҫтайҙы һөйләмәйем, ысынында шул.

Бер көн әсәйем яулыҡҡа ашанты төйнәгәйне, инәйҙең хәлен белергә, тип боролдом. Уйым - оҙаҡ тотҡарланмай ғына инеү ҙә, ҡулымдағын ҡалдырып сығыу, әсәйемдән өлкән кеше менән һүҙем, хәбәрем берекмәҫе көн кеүек асыҡ. Өй эсе яҡты, йылы, бөхтә итеп йыйыштырылған. Аҡ ҡорғандары ян-яҡҡа тартылған тәҙрә төбөндә тамсы гөлө тамылйып сәскә ата. Һығылдырып һый теҙелгән урындығының түренә ҡәҙерле ҡунаҡтай ҡуҡырайып ҡунған инәй бер үҙе генә. Минең аяҡ тауыштарын ишетеү менән уның йөҙө йылмайыуҙан балҡып китте:

- Бына бит, бәхетлененең ҡунағы бер көндә, Хәйҙәр улым да килә ята, яңғыҙ тамағыма аш үтмәй аптыранып утыра инем әле, бик тә йәтеш килеп сыҡты, әйҙә, һыйла инәйеңде! - Инәй күҙленән ғәйре, һаҡ ҡолаҡ, аяҡ тауыштарынан кемдең килгәнен, кемдең ингәнен шундуҡ һиҙемләп ала һәм һис ҡасан яңылышмай. Тыбыҙыҡлағандай аяҡтарымды алмаш-тилмәшләгәс, теләкһеҙ генә урындыҡ ҡырлауына һағып, һағайырға мәжбүр булдым. Урындыҡҡа йәйелгән ашаулыҡҡа ҙур ҡунаҡ саҡырғандағылай тәғәм теҙелгәйне; бер күнәк һыу һыйҙырмалы еҙ самауырҙың янына теленгән өй икмәге, әрсеп бешерелгән картуф, ватылған һыйыр майы, эремсекле май, яңы айыртылған ҡаймаҡ, бөрлөгән, ер еләге ҡайнатмалары, бетәү бешерелгән йомортҡалар, бер һүҙ менән әйткәндә, текә ханбикәгә, хөкөмдар батшабикәгә эләкмәҫ татлы-тәмле һый ҡуйылған.

- Әхмәҙейҙең бисәһе Хәҙисә әпкилде быларҙы әле генә. Килтергәнен хәстәрләп алдыма теҙҙе, мине ошонда мендереп утыртып ҡуйҙы ла, йомошом бар, тип, ҡабаланып ҡайтып та китте. - Зәғифә инәй алдына ҡуйылғандың ҡайҙан икәнлеген аңлатты, төшөндөрҙө.

- Әсәйем тауыҡ һурпаһы, түтәрәм икмәк, йомарлам май, йәнә бер әсмүха камауай шәкәр, бер әсмуха һинд сәйе ебәрҙе!

- Һе, улайға уҡ китһә, мин дә һурпаһыҙ, итһеҙ утырмайым шыпа, ә бына күгәрсен һөтөләй һинд сәйе ҡайҙан килеп юлыҡты һеҙгә?

- Кейәүҙәге өлкән апайым Матрайҙа һатыусы булып эшләй бит. Ул күстәнәс араһына ике әсмуха сәй һалған, әсәйем шуның береһен һиңә ебәрҙе.

- Йәмиләнең ҡулы бигерәк балыуан шул, ә йомартҡа игелек икеләтә артып әйләнеп ҡайта! Мына бәрәкәт, бына рәхәт, мына рәхмәт, мынау сәйнүктәге грузин таҡта сәйен хәҙер үк ҡаҡ та шул ожмах һыйын мул итеп услап һалып ебәр! - Эш тапмаған эш тапҡан, тигәндәй, бынан тиҙ генә сығып ысҡынып булмаясағын тойомланым.

Инәйҙең өҫтөндә эре сәскә биҙәкле, оҙон, иркен итәкле күлдәк.

- Күлдәгегеҙҙе әйтәм, бигерәк матур, инәй!

- Сағыу сәскә биҙәклене үҙ күрәм, теләгемә ярашлы, Әхмәҙулланың бисәһе Ғаҡиҙә тегеп кейҙерҙе, йә килешәме? - Инәй ҡаҡ һөйәк яурындарын бейетеп ҡыйпаңланы. Ни хәл итмәк, ни ҡылмаҡ, ниндәй торошта ла, ҡайҙа ла ҡатын-ҡыҙ ҡатын-ҡыҙ булып ҡала, сепрәк-сапраҡты оло байлыҡтай күрә.

- Килешмәгән ҡайҙа, ауылда бындай күлдәклеләрҙең күренгәне юҡ әлегә!

- Әйтмә лә, шулай икәнлеген бында утырып та беләм!

Ҡаймаҡ туҡылған бер сынаяҡ һинд сәйен түңкәрәһенән һемергән ҡарсыҡтың йөҙө алһыуланып китте:

- Ер аяғы ер башынан килгән күстәнәс сәйҙең зәхмәте зәһәр икән дә баһа, баштарым зыр әйләнеп китте, хатта! - Былай булғас хәл белеү оҙаҡҡа һуҙылмаҡсы. Күренеүенсә, инәйҙең көйләп алырға, йырлап ебәрергә яйы. Ни булһа ла булыр, тип, ыңғайға һыпырам:

- Был сәй башты ғына әйләндереп ҡалмай, телде лә сисә торған.

Инәй сал сәстәрен ҡаҡ һөйәк бармаҡтары менән аралап ебәрҙе:

- Күңел, тигәнең күккә яҡын, тел тигәнең йырға тартым. Ҡыҙ саҡтан "Ғилмияза"ны яраттым. Көйләгәнең яҙмышҡа яҡтандай тормошоңа юш килә ҡайһы саҡ. - Ул ҡайнар сәй менән ирендәрен сылатып алғас, йырлап та ебәрҙе:

*Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан,*
*Урал тауы буйлап көн битләп.*
*Илкәйемә лә шул ҡайтыр инем,*
*Аяҡтарым талһа, имгәкләп...*

Тамаҡ төбөнән саҡ ишетерлек кенә булып һығылып, һыҙылып сыҡһа ла Зәғифә инәйҙең ипле тауышы үтә лә моңло, әһәңлы ине. Ул уның тоҙ төҫөнә ингән күҙ төптәренә һағыш, һағыныу эҙҙәрен һиҙелер-һиҙелмәҫ яҡһа ла, тотош өй эсен йәмләп, нурландырып, ҡотландырып ебәрҙе. Йыр иртәнге бала-ҡояштың күңел түрен тирбәтеп, тирбәлдереп алғандыр, һис шикһеҙ, алғандыр, шулай булмаһа, берҙән-бер тәҙрәнән көләс йөҙөн күрһәтеп йылмайып баҡмаҫ ине. Йырлаусыларҙың да төрлөһө була, бәғзеләр кәрәк булған өсөн тейешлекте үтәп кенә көй һуҙалар, ә ҡайһы берәүҙәр күңеленә, йәненә һыймағанды ян-тирәһенә тарата, теләп, яратып тарата. Һуңғыһы инде беҙ йәшәгән донъяны матурлай, йәнде иркәләй, бөләңгерт тормошто йәмле, мәғәнәле итә.

Бер аҙ тын ултырғас, ҡыймай ғына һорарға иттем:

- Инәй, һин сығышың менән Урыҫбайҙан шикелле, әгәр яңылышмаһам?

- Шунан. Ҡайтмағаныма ни ғүмер! Әммә өмөттө өҙгәнем юҡ әле, бер ҡайтып урарға йыйынып, көн һайын аяҡтарымды нығытам. Сәфәргә сәхәрҙә йәйәүләп сығып, бер һыуһын атлаһаң, тиҙ арала Ашҡаҙарға барып етергә мөмкин, иртәгеһенә Ҡаҙыршаға, ары, билде һыға быуып тырышһаң, Ғәлиәхмәттең үҙенә артылдым, тигән һүҙ. Теге яғына, тау аҫтына тәгәрләһәң дә Урыҫбайға бараһың да төшәһең у!

Ҡайһылайтып кешенең уй-хыялын һүндермәк, емермәк кәрәк, ҡеүәтләп ебәрәм ыңғайы бер:

- Һеҙҙең аҙымға яйлаһаң, көн ярымда бараһың да етәһең инде!

Хәлен самалаған инәй шик белдереңкерәй:

- Көн ярымда уҡ етеп бумаҫ, ике көн тирәһе, шай.

Уйға батыңҡырап ултыра инек, инәй бер аҙ теремекләнә төштө:

- Әллә, улым, һин дә йырлаштырып алаһыңмы?

- Әлләсе, ҡабалан барыр ерем бар...

- Һис ҡасан ашыҡма, ашыҡҡан етмәҫ, бойорған етер, тигән Аллаһы Тәғәлә!

- Иртә таңдан ауыҙ күтәреп йырлап ултырыу килешер микән?

- Килешмәй тағы, һин миндә һыйы һығылған табында ҡунаҡта утыраһың да баһа!

- Боронғо йырҙарҙы белмәйем бит әле...

- Ә һин хәҙергене көйлә, йәнеңдә ятҡанды, күңелеңде тирбәткәнде һайлап, йырҙың йыртығы юҡ.

Ҡайһылайтып оло кешенең һүҙен йығаһың? Күмәгәйе тупайған тамағымды ҡырып алғас, торна муйынымды юғарыға һоноп, сәгер күҙҙәремде ҡыҫа төшөп, аллы-гөллө тауышланып йырлап та ебәрҙем:

*Хәтерҙә ул матур айлы кистәр,*
*Хәтерҙә бормалы һыу юлы.*
*Онотолмай беренсе саф мөхәббәт.*
*Онотолмай Ағиҙел һылыуы...*

- Бына бит ҡайһылай килешле! - Инәй минең семтем дә моң әҫәре сағылмаған йырымды маҡтап алған булды ла, ары дауам итте. - Бар ул ер йөҙөндә мәхәппәт, бар, ул бумаһа, гөлдәр, ҡыуаҡтар сәскә атмаҫ, ҡоштар һайрамаҫ ине!..

(Бер саҡ институтта әҙәби осрашыу мәлендә бер ҡыҙ миңә һорау бирҙе:

"Ерҙә мөхәббәт барлығын нимә менән иҫбат итә алаһығыҙ?" Күпте күргән, күпте кисергән аҡыллы кешеләй яуап ҡайтарған булдым шул саҡ: "Мөхәббәт булмаһа, гөлдәр сәскә атмаҫ, ҡоштар һайрамаҫ ине!..)

Инәй хәтирәләрен яңырта:
- Йәш саҡта миңә бер егет ғашиҡ булды бит, уйламағанда-көтмәгәндә!

- Бына ишетмәһәң ишет!

- Күрмәһәң - күр, тип тә өҫтәп ебәргән бу!

- Тегене әйтәм, күрмәлекле булғандыр!

- Һыу һөлөгө ише, ул буй-һын тиһеңме, ул төҫ-баш тиһеңме, торғаны алпамыша!

- Була бит донъяла ташҡа баҫылған кәртинкәләй ыҫбай кешеләр! - Инәйҙең һиҙгер ҡарашынан тартынғандай, һонтор, йоҡа кәүҙәмде ҡабарта биреп турыландырам, яҫы маңлайымды, асҡалаҡ йөҙөмдө һыпырам.

- Кәртинкә, тигән булаһың, ҡайтыш нимә менән сағыштырып, ул һыбайлы атынан төшөп байҡарлыҡ, йәйәүле ятып ҡарарлыҡ уҙаман ине; башында ҡама кәпәс, өҫтөндә бил тирәһе һоро төҫтәге билдек менән уралған ҡанатлы ҡыҙыл бишмәт, гәләфи салбар, аяғында хром итектәр, итектәре баҫҡан һайын шығыр-шығыр килә. Ауылға килеп инеп, атынан һикереп төшөүе була, уны шундуҡ бала-саға уратып та ала: "Еҙнәй, тупайған кеҫәләреңдәге кәнфит менән һыйла әле?" "Кәнфит түгел бит ул, гәләфи!" "Гәләфи булһа ла ашайбыҙ!" тиҙәр тегеләр. - Зәғифә ҡарсыҡ үҙе уйлап сығарған хәл-ваҡиғанан ҡыҙыҡ табып, кеткелдәп көлөп ебәрә.

- Бигерәк кәттә булған икән дә баһа ул егет!

- Кәттәнән былайыраҡ, ә мин һайланып, уны күҙгә элмәгән булдым, алйот!

- Зерә лә хата эш эшләгәнһең, инәй!

- Әйтмә лә, бына бөгөн балда-майҙа йөҙөп, рәхәтлеккә кинәнеп кенә йәшәр инем.

- Теге егетте әйтәм, һине күҙләргә ҡасан килә торғайны?

- Ҡасан тип ни, иртәһен дә, кисен дә, күрше ауылдан ине бит у!

- Нимә менән йөрөнө?

- У саҡта тихника, тигәнең юҡ ине бит, һыбай, билдәле, һыбайлыға ҡайҙа ла юл.

- Аты...

- Аты, тимә, толпары, тиң!

- Эйе, толпары шәп булғандыр?

- Эйәргә ҡушарлап һағып йөрөмәгәс, уның шәплеген этем белһен, иллә төҫө шәп ине, әллә ҡайҙан йылҡылдап күренә ине.

- Күк инеме әллә?

- Күк-буҙ!

- Күк күҙҙе тишеп бара, буҙ инде төҫтө күпкә тыйнаҡландыра! - тип әкиәтте элеп алған булам....

...Ғәйепләп әйтмәйем, ҡатын-ҡыҙҙың булмышын бик тырышһаң да үҙгәртеү мөмкин түгел, ғаиләле булһа ла, балалар үҫтерһә лә, ул һәр саҡ, хатта ҡартайғансы, күк атҡа атланған принцтың көтмәгәндә килеп инерен көтөп, уның ҡасан да булһа шулай булырына зар-интизар булып йәшәй. Кемде генә алма, һәр саҡ хыялына батып, матур, яҡшы, яҡты көндәрҙең килеренә ышана. Яҡты маяҡтай ышаныс алға әйҙәй тереклекте.

Кеше көнлө Зәғифә инәй ҙә тыуған төйәгенә бер ҡайтып әйләнергә йыйынып, аяҡтарын нығытып көн итте, йәнә теге күк-буҙ толпарға атланған йәшлек мөхәббәтенең уны эҙләп табырына инанды.

Ҡатын-ҡыҙҙың күңел донъяһы ҡырҡ яҡлы, ҡырҡ сыраҡлы, әгәр шуларҙың береһен тормоштоң ыжғыр елдәре көтмәгәндә һүндереп ҡуйһа, ул икенсеһен, өсөнсөһөн ҡабыҙа, һәм үҙен генә түгел башҡаларҙы ла яҡтырта, йылыта!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙОҠОҢ КИЛҺӘ...

■ Әгәр ҙә гел генә йоҡо килеү менән көрәшәһегеҙ икән, был нормаль хәл тип белдерә эксперттар. Баҡтиһәң, февралдә күптәр шулай "йоҡоға тала" икән. Әммә яҙ айҙары етеү менән хәлегеҙ шунда уҡ яҡшырасаҡ. Март менән сағыштырғанда, февралдә беҙгә йоҡлап китеү өсөн 8 минутҡа ваҡыт күберәк кәрәк. Етмәһә, ҡыштың һуңғы айында кеше уртаса 10 минутҡа әҙерәк йоҡлай. 10 минут күп кеүек тойолмаһа ла, даими йоҡо туймау хәлһеҙлеккә килтерә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар бынан йонсой. Профессор Колин Эспи әйтеүенсә, биологик сәғәттәр тыштан ингән яҡтылыҡ ярҙамында көйләнә. Ә ҡыш ваҡытында был сигналдар насар айырыла, шулай уҡ йорттарҙағы йылылыҡ, ҡоро һауа йоҡоно килтерә.

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Билдәле булыуынса, ҡан артерияһы стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар - фенол антиоксиданттары ҡан күҙәнәктәренә артерия стеналарына ултырырға ҡамасаулай. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

■ Ғалимдар асыҡлауынса, көнөнә өс сынаяҡ сәй эсеү оло йәштә лә хәтерҙе яҡшы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Улар тиҫтә йылдар буйына алып барылған 6 төрлө тикшеренеүҙәрҙе берләштереп, ошондай фекергә килгән. Сәйҙең файҙаһы шунда - уның составындағы тиамин ҡартайған кешеләрҙе Альцгеймер ауырыуынан һаҡлай. Көн һайын сәй эсеүселәр аҡыл ҡеүәһен дә һаҡлап ҡала ала, хәтер менән бәйле проблемалар уларҙа өс тапҡырға һирәгерәк осрай.

■ Американың билдәле диетологы Джаред Кох туҡланыу өсөн иң зарарлы ризыҡтар исемлеген төҙөгән. Уның иң өҫтөндә консерваланған помидорҙар тора. Шунда уҡ тимер банкаларҙағы башҡа ризыҡтар ҙа инә. Артабан төрлө өҫтәмәләр, антибиотиктар өҫтәлгән, етди эшкәртеү үткән ит һәм итле ризыҡтар тора. Өсөнсө урынды маргарин биләй. Диетологтар уны төрлө кислоталарға бай булғаны өсөн ҡулланырға кәңәш итмәй, тап ошо кислоталар ҡан тамырҙары эшенә кире йоғонто яһай. Зәйтүн һәм кокос майҙары ла был исемлеккә ингән, сөнки улар кеше организмында шешеү процестарына килтерә.

■ Оҙайлы ваҡыт бергә йәшәгәндән һуң да ирегеҙ һеҙҙең кәйефегеҙҙе һәм теләктәрегеҙҙе тойорға өйрәнмәһә, борсолмағыҙ, тип мөрәжәғәт итә гүзәл заттарға ғалимдар. Көслө затҡа тәбиғәттән бындай һәләт бирелмәгән. Хәҙер бының шулай икәнлеген фән дә дөрөҫләгән. Эдинбург университеты хеҙмәткәрҙәре шуға ла улар барыһын да "күҙҙәрҙән һиҙер, ирендәрҙән уҡыр", тип көтмәҫкә, ә тураһын әйтергә кәңәш итә.

■ Ғалимдар фекеренсә, анар (гранат) емеше йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай. Яңыраҡ ғалимдар уның тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған: ул ДНК ҡартайыу процесын аҡрынайта. Тикшеренеүҙәр 60 кешенән торған төркөмдә үтә. Улар ай дауамында анар экстракты капсулаларын ҡабул итә. Һөҙөмтәлә, баш мейеһе, мускулдар, бауыр, бөйөр эшмәкәрлеге, тире ҡартайыуы менән маркерҙың ярайһы уҡ түбәнәйеүе асыҡланған. Белгестәр был күҙәнәктәрҙә ДНК-ның әселәнеүе кәмеүе менән аңлата. Бынан тыш, A, C, E, витаминдары, тимер һәм ирекле радикалдар эшен нейтралләштереүсе антиоксиданттарға бай.

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

**"Ҡарттар сынаяҡ киҫәгендә йәштәр ҙур көҙгөлә күргәнгә ҡарағанда ла күберәкте күрә", бер тигән аҡыл бар. Эйе, олоғая килә кешенең тормош тәжрибәһе арта, төрлө сәбәптәрҙең ниндәй эҙемтәләргә алып килеүен күҙәтеп, теге йәки был ваҡиғаның нимә менән тамамланыуын алдан тоя, һиҙемләй башлай. Беҙҙән алда йәшәгән халыҡтарҙың тарихын өйрәнеү кешенең һәм йәмғиәттең үҙ ғәмәлдәре әжерен татыуын күрһәтә: яҡшылыҡ сәскәндәр - яҡшылыҡ ура, яманлыҡ сәскәндәр - яманлыҡ ура. Киләсәккә ышаныс менән ҡарарға теләгәндәр үткән ваҡиғаларҙан, бай тәжрибә туплағандарҙың нәсихәтенән фәһем алырға тейеш.**



# ЯБЫЛҒАН ИШЕККӘ ҠАРАП,

## асылғанынан мәхрүм ҡалма!



Цивилизацияның үҫеүе халыҡтарҙың тормошон яҡшыртты: бөгөн кеше матди яҡтан тәьмин ителгән, тамағы туҡ, тормошона хәүеф янамай. Етеш, мул тормошта йәшәү өсөн кешелек бик оҙаҡ ваҡыттар тырышты һәм маҡсатына иреште. Әммә бының кире яҡтары ла бар. Тормош ҡануны шулай: бер ишек ябыла икән, икенсеһе асыла. Ләкин бөтә бәлә шунда: бер ябылған ишеккә ҡарап тороп, асылғанына иғтибар итмәйбеҙ. Күберәк байлыҡ тупларға, етеш, мул тормошта йәшәргә ынтылып, тормош ҡиммәттәре, кешелек ҡиммәттәре системаһының үҙгәреүен күрмәй ҙә ҡалғанбыҙ. Бөгөн йәмғиәттең тормош ҡиммәттәре муллыҡҡа ҡоролған, бөтә нәмә аҡса, байлыҡ тирәләй әйләнә башлаған, әхлаҡи, рухи үҫеш кәрәк икәнен онотҡанбыҙ, рухи, милли, асыл ҡиммәттәрен юғалтҡанбыҙ.

"Баҫыу бер нәмә лә сәсмәүҙән генә түгел, насар орлоҡ сәсеүҙән дә боҙола",- тип яҙҙы урта быуаттарҙа йәшәгән ғалим имам Раббани. Эйе, тормошобоҙға, йәшәйешебеҙгә Көнбайыш илдәренең йәшәү принциптары, ҡиммәттәре килеп инеп, кешелеккә насар орлоҡтар сәскәнен дә һиҙмәй ҡалғанбыҙ. Бер-береңде хөрмәт итеү, ихтирамлы булыу, ярҙамсыллыҡ, дуҫлыҡ, киң күңеллелек, ихласлыҡ кеүек кешелек сифаттарыбыҙ үҙ-ара конкуренцияға, көнләшеүгә, күрә алмаусанлыҡҡа әйләнде. Милли асылыбыҙҙың, йәшәйештең нигеҙе ҡаҡшаны, яуаплылыҡ юғалды, кешелә вайымһыҙлыҡ артты. Яуаплылыҡтан ҡасып, ситтән генә күҙәтеүселәр һәм кешеләр эшләгән эште кире баһалаусылар, тәнҡит утына тотоусылар, башҡорт халҡының милли үҙенсәлектәренә, тойғоларына тотоноп, үҙ мәнфәғәте өсөн генә йөрөүсе әҙәмдәр күбәйҙе.

Кешелек өсөн ошондай ауыр һынау осоронда милләтебеҙҙең киләсәге, милли асылы, теле өсөн көрәш майҙанына сыҡты сая, тәүәккәл, илһөйәр, телһөйәр башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һәм "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына берләшеп, киләсәгебеҙ өсөн бар яуаплылыҡты үҙ өҫтәренә алып, батырлыҡ өлгөһө күрһәтте. Халҡыбыҙҙың күңел һандығынан мең йыллыҡтар дауамында бөртөкләп йыйылған ынйы һәм аҫыл таштар кеүек булған хазиналарҙы - халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, кәсептәрен, ашһыуҙарын, кейемдәрен, көнкүреш кәрәк-яраҡтарын, башҡорт рухын, телен күтәреп алып, халҡыбыҙға кире ҡайтарыу, йәш быуынға аманат итеп тапшырыу - ағинәйҙәрҙең төп маҡсаты.

Ағинәйҙәр милләтебеҙҙең быуындан-быуынға тапшырылып килгән тормош тәжрибәһен аҡыл менән туйыландырып, үҙҙәренең йәшәү рәүеше өлгөһөн дә ҡушып, шанлы тарихыбыҙ тураһында ла һөйләп, халҡыбыҙҙа илһөйәрлек, телһөйәрлек тәрбиәләй, ғорурланыу хистәре уята. "Һәр бер бала тәбиғи иман менән тыуа, уның христиан, йәһүд, потҡа табыныусы булып китеүе ата-әсәнән тора", тигән бөйөк хәҙисе бар Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең. Балалар, йәш ғаиләләр менән эшләү ағинәйҙәрҙең эшендә ҙур урын алып тора.

Бөгөн районыбыҙҙа "Ағинәй" ойошмаһы булмаған бер генә ауыл да юҡтыр. Был ҡатын-ҡыҙҙар көслө, маҡсатлы эшләүсе бер йоҙроҡ булып тупланды, халыҡ араһында абруйы артты. Шуға күрә лә районда, ауылдарҙа үткән бер сара ла ағинәйҙәр ҡатнашлығынан тыш үтмәй.

"Башҡорт халҡы киләсәккә ниндәй статуста һәм ролдә аяҡ баҫасаҡ - был бөгөн хәл ителә. Төплө һәм киң белемле, күп профессиональ белгестәре булған халыҡ булырмы, әллә ҡара эштә йөрөгән һәм хеҙмәтләндереүсе өлкәләрҙә эшләгән халыҡмы - уныһы үҙебеҙҙән тора. Аңыбыҙҙы томаларға бирәбеҙме, әллә мәғрифәт юлы менән китәбеҙме?" Ошолай тип яҙғайны Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһененең беренсе урынбаҫары Азат Бадранов Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан сағында. Эйе, башҡорт халҡының яңырыу мәсьәләһе, уның яңы заманға яраҡлашып, тиңдәр араһында тиң булып йәшәүе меңәрләгән интеллигенция вәкилдәренән ҙур яуаплылыҡ талап итә. Был осраҡта үҙ-үҙеңә тәнҡит күҙлегенән ҡарап, тейешле баһа бирә алыуың да мөһим. "Йөрәктән сыҡҡан ихлас һүҙҙәр һәм эштәр генә башҡа йөрәктәргә барып етә",- ти халҡыбыҙ.

Ағинәйҙәр - улар әсәйҙәр, бөгөн улар үҙ ғаиләләрендә - ҡартәсәй һәм өләсәйҙәр. "...Һәм балаһын яуға оҙатҡанда Бер үк төрлө илай әсәләр",- тигән йыр һүҙҙәре бар. Ватаныбыҙҙың именлеге, киләсәге өсөн барған Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан меңәрләгән башҡорт яугирҙары араһында уларҙың да улдары, ейәндәре бар. Оло йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, бейәләй, ойоҡбаштар бәйләп, башҡорт милли аҙыҡтары әҙерләп, доға-фатихала булып, ағинәйҙәр хәлдәренән килгәнсе яугирҙарға ярҙам итергә тырыша. Шулай янып йәшәй ағинәйҙәр. "Шәм булыу еңел түгел, яҡтыртыу өсөн яна белергә кәрәк. Янмайһың икән, яҡтырта алмайһың", тигән Руми. Янып йәшәй, ауылдарыбыҙға ут, ҡот бирә, кешеләр күңеленә иман, сәм, ғәм йоҡтора беҙҙең фиҙаҡәр ағинәйҙәребеҙ.

**Мөхтәр МОНАСИПОВ.**
**Баймаҡ районы, Ярат ауылы.**

УҠЫУСЫ ХАТЫ

# ИЛЬӨЙӘРЛЕК ТАРИХ АША КИЛӘ



**Уҡырға яратам мин. Был ғүмеремдә байтаҡ әҫәрҙәр уҡыным, уҡыйым. Ҡасандыр Михаил Шолоховтың "Тымыҡ Дон"ы донъя күргәс, шул тиклем мауығып уҡығайным. Салауат ҡала китапханаһында сират тороп, ул китапты саҡ ҡулға эләктергән 1950 йыл һис тә онотолмай.**

Был әҫәрҙе бөгөн Дон казактарының фажиғәле яҙмышы тип баһалайҙар. Шулайҙыр. Ә бына башҡорт халҡының кисергән фажиғәле яҙмышын Силәбе яҙыусыһы, тарихсы һәм журналист Рәшит Хәкимов "Япон мулла" романында иң киткес итеп тасуирлай. Ошоғаса бындай әҫәр уҡығаным булманы. Был роман "Ватандаш" журналының быйылғы бер нисә һанында баҫылды. Был хаҡта яҙыуым шунан. Унда Баймаҡ районынан Биктимер Солтанов тигән кеше бер нисә урында телгә алына. Ул башҡортҡа хас һәләттәрҙең береһенә эйә - ҡурайсы. Тик Колчак, һуңынан Семенов армияһында булып, сит илгә сығып китә. Һағынып-һарғайып, киренән тыуған еренә әйләнеп ҡайта. Әммә 1937-1938 йылдарҙағы золом ҡорбанына әүерелә һәм һөргәнгә ебәрелгән ерҙә, Көнсығышта мәңгелеккә тороп ҡала. Үтә лә әсе, тетрәндергес яҙмыш. Ҡыҙыҡ, ә ул шәхес ысынында ла булғанмы? Әллә тик әҫәр геройымы? Ысынбарлыҡтағы шәхес булһа, бәлки, бында нәҫел-ырыуы йәшәп ятадыр? Шәхесте күргән-белгәндәр ни уйлай икән? Гәзит буттәрендә шуларҙың хәтирәләрен, уй-фекерҙәрен белге килә бик тә! Әйткәндәй, әле тыуған ауылым Ҡашҡарҙа (Йылайыр районы) 1937 йылғы золом ҡорбандары иҫтәлегенә (6 кеше атылған, 4-һе һөргәнгә ебәрелгән) стела әҙерләнгән. Был бик кәрәкле эш, золом ҡорбандарын да оноторға тейеш түгелбеҙ.



Баяғы Рәшит Хәкимов романына кире ҡайтып, ундай әҫәрҙе уҡығаным булманы, тип ҡабатлайым. Тетрәндем. Башҡорттоң ирекле йәшәргә ынтылған ер кешеһе булғанына тағы бер инандым. Ошоғаса Башҡорт иленең Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушылыуы хаҡында һөйләнек. Ҡушылғандыр, сөнки күрше ҡәүемдәр көс йә алдыҡ юл менән Рәсәй батшалығына тоғро хеҙмәт итеп, башҡорт ырыуҙарына ҡаршы эш алып бара, йыш һөжүм итә, тыныс йәшәргә ирек бирмәй. Йәнәһе лә, башҡорт Рәсәй дәүләтенә ҡаршы. Башҡорт Рәсәйгә бер көндә генә баш һалмай, ә йылдар буйына килешеү юлы менән ҡушыла. Ул сүрәттә лә башҡорт аҫабалыҡты төп шарт итеп ҡуя - ер халыҡ ҡарамағында ҡала. Илгә хеҙмәте иһә сиктәрҙе һаҡлау, хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашыу, яһаҡ түләү. Рәсәй ҡаһарман халыҡты хәрби походтарҙа, сит илдәр менән һуғышта оҫта файҙалана. Рәсәйгә ҡушылыуына бер йыл да үтмәй, Мәскәү батшалығының Ливон һуғышында, аҙаҡ Рәсәй империяһының бөтөн хәрби бәрелештәрендә лә ҡатнаша башлай. Әҙ булмай башҡорт яугирҙарының дошман ҡотон алырлыҡ батырлыҡтары.

Шуныһы ғәрләккә тейә: мәктәптәр һәм вуздар өсөн нәшер ителгән тарих дәреслектәрендә башҡорт ярым ҡырағай, аңһыҙ, тарҡау халыҡ итеп һүрәтләнә килде. Беҙҙең халыҡтың аҡыллы, ҙур ойоштороу һәләтенә эйә сифаттары, танылған ҡыйыу шәхестәребеҙ хаҡында федераль дәреслек һәм уҡыу программаларында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ, уларҙы күрәләтә күрмәмеш тә белмәмеш булалар. Тик Салауат батырыбыҙ хаҡында Емельян Пугачевтың көрәштәше булараҡ ҡына бер аҙ әйтеп кителә ине. Башҡа бихисап күренекле шәхестәребеҙ хаҡында хатта үҙебеҙ ҙә оҙаҡ йылдар белмәнек. Рәсәйҙе мәғдән менән эш итергә өйрәткән Надир Уразмәтов, Исмәғил Тасимов кеүектәр, ғөмүмән, телгә алынмай ине.

Әбына сағыштырмаса йәш автор Рәшит Хәкимов үҙ әҫәрендә башҡорт халҡының фажиғәле тарих биттәренән ҡайһы бер билдәһеҙ мәғлүмәттәрҙе документаль нигеҙҙә асып бирә алған. Тарихыбыҙ ҡатламдарында ҡалып, онотола яҙған ана шундай ваҡиғалар һәм шәхестәр мәктәп һәм вуздарҙың тарих дәреслектәренә индерелһен ине. Йәш быуын үҙ халҡы һәм ватанының үткәне аша ғына бөгөнгөнө баһалай ала һәм ысын илһөйәр булып үҫә.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## ӨЙГӘ ИНГӘНДӘ УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

"Әгәр ҙә берәйегеҙ өйгә ингәндә:

**Әғүүҙү бикәлимәәтилләәһит-тәәммәәти мин шәрри мәә халәҡ.**

"Ул барлыҡҡа килтергән бөтә яуызлыҡтарҙан Алланан Уның үҙенең һүҙҙәрендә яҡлау эҙләйем" тиһә, ошо өйҙән сыҡҡансы уға бер нәмә лә зыян килтермәйәсәк". *(Бохари, "Әнбиә", 10-сы хәҙис, Мөслим. "Зекер", 54-се хәҙис).*

## АШАҒАНДА УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒАЛАР

**Әлхәмдү лилләәһил-ләҙии кәфәәнәә үә ар'үәәнәә гайра мәкфиййин үә ләә мәкфуур.**

"Маҡтауҙарым булһын Һинә, эй Аллам! Һин беҙгә етерлек кимәлдә ашамлыҡ һәм башҡа ниғмәт бүләк иттең. Үҙеңдең шәфҡәтлелегең менән беҙҙе ашатың һәм эсерҙең. Минең рәхмәтемде Һинең бүләктәрең менән сағыштырырлыҡ та түгел. Барыһы ла Һинең илаһилығың һәм хакимлығың алдында меҫкен хәлдә бәләкәй. Һинең бөтмәҫ-төкәнмәҫ бүләктәрең өсөн Һинә тейешле кимәлдә рәхмәттәребеҙҙе еткерә алмағанлығыбыҙҙан сығып, үҙебеҙҙең көсһөҙлөгөбөҙҙе танайбыҙ".

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: "Һәр берегеҙ ашағанда:

**Аллааһүммә бәәрик ләнәә фииһи үә атгимнәә хайран минһ.**

"Эй Аллам! Беҙгә ошо ризығыбыҙҙы бәрәкәтле ит һәм унан да яҡшырағын бирсе", - тип әйтһен".

## АШАҒАНДАН ҺУҢ УҠЫЛҒАН ДОҒА:

Әлхәмдү лилләәһил-ләҙии атғәмәнәә үә сәкаанәә үә джәғәләнәә минәл-муслимиин. Аллааһүммәғфир үәрхәм үәхфаҙ саахибәт-тағәәми үәл-әәкилиинә үә лимән сәғә фииһи үә лиджәмииғиль-му'миниинә үәль-му'минәәт. Аллааһүммә нәүуир ҡулүүбәнәә би'әнүәәри мәхәббәтикә үә ҙикрикә йәә ҙәлджәләәли үәл-икраам. Аллааһүммә әхйинәә хәйәәтән тайийбәтән бис-сыххәти үәс-сәләәмәти үәл-ғәәфийәти фид-диини үәд-дунйәә үәл-әәхирати иннәкә ғәләә күлли шәй'ин ҡадиир. Аллааһүммә иннәә нәс'әлүкә тәмәәмән-ниғмәти үә дәүәәмәл-ғәәфийәти үә хүснәл-хаатимәһ. Аллааһүммә зид үә ләә тәнҡус бихурмәтин-нәбиййи салләллааһу ғәләйһи үә сәлләмә үә бихурмәтил-фәәтихәһ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Туғыҙынсы хат: "Ҡасан үпкәләргә мөмкин?"

Һеҙҙе рәнйетергә теләгәндәрендә генә үпкәләргә мөмкин. Әгәр теләмәһәләр, ә үпкәгә килтергән сәбәп ни бары осраҡлыҡ ҡына икән, нишләп үпкәләргә ти?

Асыуланмайса ғына аңлашылмауcанлыҡты асыҡларға ла ҡуйырға була бит.

Әгәр рәнйетергә теләһәләр? Үпкәләтеүгә ҡаршы үпкәле һүҙҙәр әйтерҙән алда уйлағыҙ: улар кимәленә төшөргә кәрәкме? Сөнки, ғәҙәттә, үпкәләү ҡайҙалыр түбән ята һәм уны күтәреү өсөн эйелергә кәрәк.

Шулай ҙа үпкәләргә хәл итһәгеҙ, башта ниндәйҙер математика ғәмәлдәрен үтәп ҡарағыҙ - алыу, бүлеү һ.б. Әйтәйек, һеҙҙе әлөшләтә генә ғәйепле булған осраҡ өсөн ҡыйырһыттылар, ти. Үпкәләү тойғоғоҙҙан һеҙгә ҡағылмаған барыһын да алып ташлағыҙ.

Ә инде һеҙҙе изге ниәттән сығып үпкәләттеләр икән, үҙ тойғоғоҙҙо изге ниәттәрҙән сығып әйтелгән кәмһеткес шелтәләргә һ.б. бүлегеҙ. Эҫтән генә шулай ниндәйҙер кәрәкле математик ғәмәл яһап, рәнйеткес һүҙҙәргә үҙ бәҫегеҙҙе төшөрмәй генә яуап бирә алаҫаҡһығыҙ: ни тиклем үпкәгә иғтибарығыҙ аҙ, шул тиклем абруйығыҙ ҙа арта. Билдәле бер сиктәргә тиклем, әлбиттә.

Ғөмүмән, артыҡ тиҙ үсегеүсәнлек - аҡыл етешмәгәнлек йәки ниндәйҙер комплекстар билдәһе. Аҡыллы булығыҙ.

Инглиздәрҙең бер бик яҡшы ҡағиҙәһе бар: һеҙҙең хәтерҙе ҡалдырырға, үпкәләтергә теләгән осраҡтарында ғына үпкәләргә. Ябай иғтибарһыҙлыҡҡа, онотоусанлыҡҡа (был кешенең йәшенә йәки ниндәйҙер психологик етешһеҙлектәренә бәйле хас ҡайһы саҡта) үпкәләргә кәрәкмәй. Киреһенсә, бындай "онотоусан" кешегә ҡарата айырыуса иғтибарлы булығыҙ - был матур һәм изгелекле.

Был һеҙҙе үпкәләткән осраҡта, ә үҙегеҙ кемдәлер рәнйеткән сакта ни эшләргә? Үпкәсел кешеләргә ҡарата айырыуса иғтибарлы булырға кәрәк. Үпкәселлек характерҙың бик яфалаҡтыс һыҙаты бит.

## Унынсы хат: "Ысын һәм ялған намыҫ"

Мин билдәләмәләрҙе яратмайым һәм уларға әҙер түгелмен. Әммә выждан һәм намыҫ араһындағы ҡайһы бер айырмаларҙы күрһәтә алам.

Выждан һәм намыҫ араһында бер мөһим айырма бар. Выждан һәр ваҡыт күнел төпкөлөнән килә, һәм выждан ярҙамында ниндәйҙер кимәлдә таҙарыналар ҙа. Выждан ғазаплай. Выждан ялған булмай. Ул бер аҙ баҫылған хәлдә, йәки уға ныҡ ҡабартылған була (быныһы һирәк).

Ләкин намыҫ төшөнсәһе тураһында күҙаллауҙар бөтөнләй ялған булыуы ихтимал, һәм ошо ялған төшөнсәләр йәмғиәткә ҙур зыян килтерә. Мин "мундир намыҫы" тигәнде күҙ уңында тотам. Дворяндар намыҫы тигән төшөнсә кеүек йәмғиәтебеҙгә хас булмаған күренеш юҡҡа сыҡты, әммә "мундир намыҫы" ауыр йөк булып ҡала килә. Гүйә, кеше үлгән дә, тик ордендары һүтеп алынған мундир ғына тороп ҡалған. Һәм уның эсендә выжданлы йөрәк бүтән типмәй.

"Мундир намыҫы" етәкселәрҙе ялған һәм хаталы проекттарҙы яҡларға, күрәләтә насар тәҙәләштәрҙе ныҡышып дауам иттерергә, ҡомартҡыларҙы һаҡлаған ойошмаларға ҡаршы көрәшергә ("беҙҙең тәҙәләш мөһимерәк") һ.б. мәжбүр итә. Бындай "мундир намыҫын" яҡлау миҫалдарын бихисап килтерергә була.

Ысын намыҫ - һәр ваҡыт выждан менән тап килә. Ялған намыҫ - сүллектәге, кеше (дөрөҫөргә, "чиновник") күңеленең әхлаҡи сүллегендә сағым кеүек.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 16 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 "Горячий лёд". Фигурное катание. Открытие сезона. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.20, 0.35, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
15.30, 0.05 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера "Нинель". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Хор". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30, 14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.45 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.55, 2.00, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой. Продолжение". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Новости недели (на рус.Яз). [12+]**
**14.45, 17.45, 18.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45 Х/ф "Советник". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Квадратные метры. [12+]**
**18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Защитники Отечества. [12+]**
**20.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00, 5.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Клич мой будет звучать над землею". [12+]**
**23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 17 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30, 0.10 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера "Нинель". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера "Хор". [12+]
0.40, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30, 14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.45 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.55, 2.00, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой. Продолжение". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 4.30 Уфимские умы. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**18.45 Хоккей. Салават Юлаев (Уфа) - Авангард (Омск). КХЛ.**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**2.15 Спектакль "Хаджи Эфэнди женится". [12+]**
**4.15 Письма солдатам. [12+]**

## 18 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30, 0.50 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера "Нинель". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера "Хор". [12+]
0.10 Д/ф "Бог войны. Укротители огня". Ко Дню оружейника. [12+]
1.20, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30, 14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.45 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.55, 2.00, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой. Продолжение". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 5.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Счастье". [12+]**

## 19 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30, 0.10 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера "Нинель". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера "Хор". [12+]
0.40, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30, 14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.45 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.55, 2.00, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой. Продолжение". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.15 Патриот РФ. [12+]**
**16.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 4.30 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Сваха". [12+]**

## 20 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Т/с Премьера "Юг". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30, 14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.45 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.55, 3.00 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
1.10 Х/ф "Бендер: Последняя афера". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 18.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.15, 20.15, 22.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**16.45, 19.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Ете егет. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**2.15 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

## 21 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/с Премьера "MONEYпуляторы: развод на любовь". [16+]
10.50 "Играем свадьбу!" [12+]
11.45, 12.30 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.05 "Наше всё". [12+]
13.55 Д/с "Осведомленный источник в Москве". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Родня". Музыкальный детектив. [12+]
19.50 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.25 Х/ф "Сядь за руль моей машины". Премия "Оскар" и "Золотой глобус"-2022 за лучший фильм на иностранном языке. [18+]
2.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Верю я в любовь". [16+]
0.35 Х/ф "Найди нас, мама!" [12+]
4.10 Х/ф "Эхо греха". [12+]
5.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Защитники Отечества. [12+]**
**8.15 Ете егет. [12+]**
**9.00 Хазина. [6+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Ат уйнатып. [12+]**
**11.45 Елкән. [6+]**
**12.15 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Квадратные метры. [12+]**
**12.45 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00, 4.15 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/с "Герои". [12+]**
**17.45 Уфимские умы. [12+]**
**18.15 Специальный репортаж. [12+]**
**18.50 Хоккей. Локомотив (Ярославль) - Салават Юлаев (Уфа). КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15 Ҡурай-шоу. [12+]**
**23.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Концерт группы "Хазина". [12+]**
**2.15 Спектакль "Пустая колыбель". [12+]**
**5.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

## 22 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 23.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.05 Х/ф "Ширли-мырли". К 85-летию со дня рождения Владимира Меньшова. [16+]
16.55 Д/ф "Владимир Меньшов. "Кто сказал: "У меня нет недостатков"?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера "Обоюдное согласие". [18+]

### РОССИЯ 1

6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.50 "Истории Большой Страны". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Петросян-шоу. [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Х/ф "Васильки для Василисы". [0+]
3.21 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Йома. [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Ат уйнатып. [12+]**
**11.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**12.00 Сулпылар-2024. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дорога к храму. [6+]**
**14.30 Честно говоря. [12+]**
**15.15 Д/с "Герои". [12+]**
**16.00 Концерт Расуля Карабулатова. [12+]**
**18.30 Лидер профессионального образования. [12+]**
**19.00, 3.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Рустама Гизатуллина. [12+]**
**1.00 Спектакль "Кукольный дом". [12+]**
**4.00 Ете егет. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Сентябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (13) дүшәмбе | 4:59 | 6:52 | 13:30 | 17:26 | 19:27 | 21:22 |
| 17 (14) шишәмбе | 5:01 | 6:54 | 13:30 | 17:24 | 19:25 | 21:18 |
| 18 (15) шаршамбы | 5:04 | 6:56 | 13:30 | 17:22 | 19:22 | 21:15 |
| 19 (16) кесе йома | 5:06 | 6:58 | 13:30 | 17:19 | 19:20 | 21:12 |
| 20 (17) йома | 5:08 | 7:00 | 13:30 | 17:17 | 19:17 | 21:09 |
| 21 (18) шәмбе | 5:11 | 7:02 | 13:30 | 17:15 | 19:14 | 21:06 |
| 22 (19) йәкшәмбе | 5:13 | 7:03 | 13:30 | 17:13 | 19:12 | 21:03 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*АФАРИН!*

# ТЕАТРҘА ТОРМОШ ТУҠТАМАЙ



**Ғүмеренең унынсы тиҫтəһен ваҡлаған Арыҫлан Мөбəрəков исемендəге Сибай дəүлəт башҡорт драма театрын республикабыҙҙа бик яҡшы белəлəр - Урал аръяғында ул юғары кимəлдəге берҙəн-бер профессиональ театр. Ауылдар буйлап гастролдəрҙə йыш йөрөгəнгəмелер, уны халыҡ театры тип тə атайҙар. Был баһа уны һис тə кəмһетмəй, киреһенсə, бəҫен күтəрə, халыҡсанлығына баҫым яһай, сөнки һəр театрға былдай мөһөр баҫылмай. Сибайҙар шундай баһа йөрөткəн берҙəн-бер театр, тиһəк тə хата булмаҫ. Был дөрөҫлөктө бəхəсһеҙ генə ҡабул итергə кəрəктер, сөнки 94-се ижади миҙгелен асҡан театр быны бер быуатҡа яҡын тарихында йылдан-йыл иҫбатлап килə. Килəсəктə лə шулай дауам итер, тип ышанайыҡ, театрға тоғро быуындар күсəгилешлеге өҙөлмəҫ, тип өмөт итəйек. Əлеге көндə театр ниндəй хəстəрҙəр менəн йəшəй, мөбəрəковсылар яңы ижади миҙгелен ҡасан, нисек асырға уйлай? Ошо турала театрҙың баш режиссеры Денис НУРҒƏЛИНдəн һораштыҡ:**

- 94-се Ижади миҙгелде, ғəҙəттəгесə, премьера менəн асабыҙ. Быйыл Мəскəү драматургы Мəликə Икрамованың "Ололар көнө" тип аталған пьесаһы буйынса "Доктор" тип аталған спектакль əҙерлəйбеҙ. 23,24 сентябрҙə тəүге тамашаларҙы театр һөйөүселəр хөкөмөнə сəхнəгə сығарабыҙ. 25 сентябрҙə Айбулат Сəсəнбаев пьесаһы буйынса Зиннур Сөлəймəнов ҡуйған "Беҙҙең байлыҡ" спектакле күрһəтелəсəк. Шулай итеп, яңы миҙгелде асыу өс көн дауамында барасаҡ.

Əйткəндəй, яңы спектаклебеҙҙə төп ролдəрҙең береһе - докторҙы йəш актер Фидан Шəйəхмəтов башҡара. Сығышы менəн ул Баймаҡ районы Иҙрис ауылы егете. Элек "Сулпан" балалар театрында эшлəп, Салауат театрына күскəйне, əле кире Сибайға əйлəнеп ҡайтып, драма театрында эш башланы. Йəш көстəрҙең театрға килеүе беҙҙең өсөн һəр саҡ ҡыуаныслы ваҡиға. Кəйефтəребеҙ күтəренке, йəйге ялдарҙан һуң ең һыҙғанып эшкə тотондоҡ. Октябрь айында Дағстан республикаһына гастролгə барабыҙ. Унда Флорид Бүлəковтың пьесаһы буйынса "Их, күгəрсенкəйҙəрем!" һəм Туфан Миңнуллин əҫəре буйынса "Əлдермештəн Əлмəндəр" спектаклдəрен алып барабыҙ, балаларға "Приключения лесного эха" əкиəтен күрһəтəсəкбеҙ. Дербент ҡалаһында ошо өс спектакль менəн сығыш яһайбыҙ. Июнь айында Дағстандың Табассаран театры беҙгə килеп ҡайтҡайны, ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы, тигəндəй, хəҙер үҙебеҙ юлға йыйынабыҙ. Был сара Рəсəй Мəҙəниəт министрлығының "Ҙур гастролдəр" Бөтə Рəсəй берҙəм гастроль-концерт планына ярашлы башҡарыла.

Ноябрь айына Владимир Жеребцовтың "Потомок" ("Вариҫ") пьесаһын сəхнəлəштереүҙе күҙаллайбыҙ. Был əҫəр Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арналасаҡ. Был спектаклде сəхнəгə үҙем сығарасаҡмын. Декабрь айында Яңы йыл байрамына балалар өсөн, ғəҙəттəгесə, яңы спектакль əҙерлəнə. Быйыл уны режиссерыбыҙ Залина Усманова сəхнəгə сығара, пьесаны бөгөнгө заманға бəйлəп, балаларға ҡыҙыҡ булғандай итеп эшлəйəсəк.

Беҙ пландар менəн генə йəшəмəйбеҙ, театр көндəлек тормошо, тынғыһыҙ эштəре менəн мəшғүл. Күптəн түгел генə ике төркөм "Беҙҙең байлыҡ" һəм "Их, күгəрсенкəйҙəрем!" спектаклдəре менəн Баймаҡ, Əбйəлил һəм төньяҡ-көнсығыш районлар буйлап гастролдəрҙə йөрөп ҡайтты. 6,7 сентябрҙə мəктəп балалары өсөн махсус ҡуйылған "Как избежать зла?" спектакле көндөҙ театр сəхнəһендə күрһəтелде, 9 сентябрҙə "Их, күгəрсенкəйҙəрем!"де Белорет ҡалаһына алып барҙыҡ. Театр яңы спектакль əҙерлəгəн мəлдə лə, ваҡыт табып, гастролдəргə сыға, тамашасыларын ҡыуандыра. Беҙ уларҙы театрҙың 94-се миҙгелен асыуға көтөп ҡалабыҙ. Иҫəнлектə-һаулыҡта осрашырға яҙһын!

**Радик ӨМӨТҠУЖИН,**
**театрҙың əҙəби-драма бүлеге етəксеһе.**

*МƏҘƏНИ МАЙҘАН*

## РОК ФЕСТИВАЛЕ

**Өфөлə "Дəрүиш Рухы" республика рок фестивале ойошторола. Сара 23 октябрҙə "Башҡортостан" дəүлəт концерт залында була.**

Фестивалдең маҡсаты - башҡорт рок музыкаһын популярлаштырыу, рок музыкаһын һөйөүселəрҙе берлəштереү һəм республикала мəҙəни туризмды үҫтереү, тип хəбəр итте ойоштороусылар. Проектты йыл һайын үткəреү планлаштырыла, унда башҡорт рок-төркөмдəре сығыш яһар тип көтөлə. Фестиваль программаһында - ҡатнашыусыларҙың концерт сығыштары, музыка индустрияһы белгестəре һəм музыканттарҙың оҫталыҡ дəрестəре, лекциялар, матбуғат конференциялары һəм интервью, музыка ҡоралдары һəм ҡорамалдары күргəҙмəһе. Ғаризалар 2024 йылдың 10 октябренə тиклем ҡабул ителə. Фестивалде Республика халыҡ ижады үҙəге булышлығында "Рух" мəҙəниəтте, туризмды һəм милли йолаларҙы үҫтереү ойошмаһы үткəрə.

## ƏЙТКƏНДƏЙ...

**Башҡортостанда сəнғəт өлкəһендə гранттар конкурсы иғлан ителде. 5 октябргə тиклем музыкаль һəм театр ойошмалары, шулай уҡ бойондороҡһоҙ коллективтар дəүлəт ярҙамы алыу өсөн ғариза тапшыра ала.**

Хəтерегеҙгə төшөрəбеҙ, 2024 йылда 15 музыкаль проект һəм 13 театр постановкаһы грант алды. Ҡатнашыу өсөн ойошмаға (коллективҡа, учреждениеға) бер генə ғариза бирергə кəрəк. Субсидия алыусылар "Электрон бюджет" системаһында Дəүлəт финанс ярҙамы сараларын күрһəтеү өсөн берҙəм майҙансыҡ ярҙамында һайлап алына.

*ТЕЛҺӨЙƏР*

## ЛАПЫЛАМАЙЫҠ!

**Ғүмер буйы ниндəй байлыҡ тупларға мөмкин? Əлбиттə, тел байлығын. Үҙебеҙҙең хəтер-зиһен банкындағы хазинаға инфляция ла, санкция ла ҡурҡыныс түгел. Шул банкка йəнə бер нисə генə һүҙ өҫтəйбеҙ.**

**Лапы.** Һай ергə тығылып ятҡан бүрəнə өйөмөн "лапы" тиҙəр. *Йылға бөгөлөн лапы ҡаплаған. Лапыны ҡутарыу.* Ауған ағас-ботаҡтар, ташҡындан ҡалған сүпсар өйөмөнə ҡарата ла "лапы" һүҙе ҡулланыла. *Дауыл йыҡҡан ағастар лапы булып ята. Йылға тирəһен лапынан таҙартыу.*

**Лапылау.** "Лапылау" - "болартыу" тигəн һүҙҙең синонимы. *Миндек бəйлəгəндə, ишек алды лапыланған. Бүтəн лапыламай эшлəгеҙ.*

**Лыу.** "Лыу" ул - һыу өҫтөндə йүгереп йөрөгəн оҙон ботло себен. *Тын һыу өҫтөндə лыу уйнай.*

**Лыу йылы.** Ун ике йыллыҡ мөсəлдең бишенсе, йəғни, аждаһа йылын, лыу йылы тип тə йөрөтəлəр. *Лыу йылында тыуғандар. Лыу йылына халыҡ юрамышы.*

**Лəгəн.** "Лəгəн" - еҙ тасты белдергəн һүҙ. *Лəгəнгə һыу ҡойоу. Боронғо лəгəн.*

**Лəғəли.** Һауыт-һаба монаятын белдергəн тағы бер һүҙ. "Лəғəли" тиһəк, самауыр батмусы күҙ алдына баҫһын. *Түңəрəк лəғəли. Лəғəлигə сынаяҡтар теҙелгəн.*

**Шулай итеп... Телебеҙҙе сит-ят һүҙҙəр менəн лапыламайыҡ, аралашыу өсөн туған лөғəтебеҙ мөмкинлеге сикһеҙ.**

**НУРБИКƏ əҙерлəне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешелəрҙең һүҙҙəренə эйəреп, донъяуи хəҡиҡəткə баҡ, һығымталар яһа һəм, əлбиттə, тормошта ҡуллан. Бəхетле һəм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҠАУҘАН УТ ЯНЫР,
## дауҙан йорт яныр

Аҡылдың ҡəҙере - əҙəп менəн, байлыҡтың ҡəҙере - йомартлыҡ менəн, ҡеүəттең ҡəҙере - баһадирлыҡ менəн.

**(Башҡорт халыҡ мəҡəле).**

Иртəнге ҡояшҡа һəм яҙҙарға нисек ҡыуанғанығыҙға ҡарап, үҙ һаулығығыҙ тураһында фекер йөрөтөгөҙ.

**(Генри Торо).**

Үҙ хəлеңə шөкөр итеүгə өлгəшеүе барыһына ҡарағанда ла ауырыраҡ, сөнки үҙең тураһында яҡшы уйларға тырышыуҙар иң һуңынан " үлə" бит...

**(Томас Элиот).**

Наҙан, аңра кешелəргə башын иҫəрлеккə һалып, нисек телəй - шулай ҡыланыу, ни телəй - шуны һөйлəү еңелерəк бирелə.

**(Зигмунд Фрейд).**

Америкала - "Хəлең нисек?" тип, Европала "Һин кем?" тип һорау ғəҙəти хəл.

**(Граффити).**

Бурыс ҡанаттан еңелерəк һəм тауҙан ауырыраҡ.

**(Япон мəҡəле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүəйəт: "Конфуцийҙың Гун, Лу һəм Чжан исемле өс уҡыусыһы булған. Донъя гиҙеп йөрөүсе бер дəрүиш аҡыл эйəһенəн һорай ҡуйған:**

**- Һеҙ Гун исемле уҡыусығыҙ тураһында ни əйтерһегеҙ?**

**- Хатта ғалимдар Гундың аҡылына һоҡлана! - тигəн Конфуций.**

**- Ə Луҙың ниндəй матур сифаттары бар?**

**- Танылған яугирҙарҙың батырлығы ла Луныҡына тиңлəшə алмай!**

**- Ə өсөнсө уҡыусығыҙ тураһында ни əйтерһегеҙ?**

**- Чжандың егəрлеге иң оло маҡтауға лайыҡ! - тигəн Конфуций.**

**Уҡытыусының уҡыусылары тураһында былдай маҡтаулы һүҙҙəрен ишеткəс, дəрүиш бик ныҡ аптыраған һəм:**

**- Һуң Гун шул тиклем аҡыллы, Лу шул тиклем батыр, ə Чжан шул ҡəҙəре егəрле булғас, улар тағы нимəгə өйрəнə һеҙҙəн? - тип һораған.**

**- Улайһа, тыңла, - тигəн Конфуций. - Гун аҡыллы, лəкин ялҡау. Лу батыр, лəкин дыуамал. Чжан егəрле, лəкин көнсөл.**

**Гун ялҡау кешегə аҡыл ғына бəхет килтермəйəсəген белмəй. Лу иһə, һаҡ булмаһаң, батырлыҡтың үлем менəн тамамланыуы ихтимал икəнен күҙ алдына ла килтермəй. Чжан көнсөллөк эргəһендə шатлыҡ йəшəмəй икəнен белмəй. Ошо хəҡиҡəткə өлгəшмəй тороп, мин был егеттəрҙең уҡытыусыһы, улар минең уҡыусым булыуҙан туҡтамаясаҡбыҙ..."**

"Киске Өфө" гəзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиəте**
Гəзит Киң коммуникация, элемтə һəм мəҙəни мираҫты һаҡлау өлкəһен күҙəтеү буйынса федераль хеҙмəттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркəлде.
Теркəү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24036

**Баш мөхəррир:**
**Гөлфиə Гəрəй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхəрририəт:**
Сəриə ҒАРИПОВА,
Əхмəр ҒҮМƏР-ҮТƏБАЙ,
Фəүзиə МӨХƏМƏТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һəм нəшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дəүлəкəн ҡалаһы, Мəжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхəррир** | **253-25-44** |
| **Хəбəрселəр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
12 сентябрь 17 сəғəт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сəғəт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмəте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гəзитенə ойошмаларҙан һəм айырым кешелəрҙəн рекламалар ҡабул итə.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 1573